*Ринат КАМАЛ*

# ШАҢДАУ

Роман

## БЕРЕНСЕ КИҪӘК

### I

Шаңдау, Әй йылғаһы аръяғындағы Ҡалатауҙың урман һырыған түштәренә ҡаҡлығып, Мәғҙән, Һарыса, Әпшән ауылдары яғына һибелде, барса иңдәргә таралды... Әллә ҡайҙан, көньяҡтан килһә лә, һаман һауала һәленеп, ағас остарын һелкетеп, аң-зиһенде биләп торҙо.

Туптан аттылармы әллә? Әллә, боҙ сатнап, шул Әй буйҙарын һиҫкәндерҙеме? Ҡая осонан упҡын төбөнә дәү таш ҡоланымы әллә — барса тирә-йүн тетрәнде.

Бығаса был тарафтарҙа туп тауышы ишетелмәне, яу-ғәрәсәт ҡупманы — тағы өйәҙ яғында ғына атыша башламаһалар?

Ғәҙәттә, кешеләр шаңдауҙың үҙен генә ишетә, шаңдауҙың үҙенә генә иғтибар итә. Ә шаңдау, дөрөҫөн әйткәндә, тауыштың үҙенән башҡа яңғырамай бит — шаңдау һәр ваҡыт тауыштың шәүләһе, шаңдағы ғына... Тауыштың хеҙмәт емеше... Шуға бәндәләр иң тәүҙә шаңдау артында йәшеренеп торған ауаздарҙы танырға, уларҙың сәбәбе тураһында уйланырға тейеш һымаҡ.

Был юлы ла был хәтәр шаңдау эҙһеҙ уҙҙы, буғай. Үҙ ғәме менән мәшғүл халыҡ уға әллә ни әһәмиәт бирмәне.

Эңер яҡынлаша ине. Әй йылғаһы һаман ҡалын боҙҙарын ақтарып ташлай алмай аҙаплана, тулғаҡ тотор мәле яҡынлашҡан ҡатындай, ах та ух килә.

Әй йылғаһы Мәғҙән ауылынан Әпшән яғына күскәс, Иҫке йорт менән Ҡарағайтал утрау төҫләрәк булып ҡалды. Хәҙер шунда әллә нисә хужа малын көтә — уңай булды байҙарға, хәллерәк кешеләргә. Уларға ни тәбиғәттең дә йайы килеп тора.

Әйҙең элекке юлы күлгә әйләнде — һыуы таҙа, йылға һыуылай тәрән. Күптәр шунан эсә, мал һуғарыуға ла, ат юшарға ла яйлы.

Эңер алдынан донъя һилләнде, төҫтәр ҡуйырҙы, һыу алышындағы тирәктәр һырты асығыраҡ беленде. Зиһен асылды, күҙҙәр үткерләнде. Кешеләр ҙә төштән һуң тәнде ҡоршаған ойотҡонан айныны, быуындарын яҙҙы.

Эңерҙә офоҡ ситтәре лә керештәй тартылып китә, иҫ киткес төҫтәргә мансыла. Гүйә, ҡояш байыр алдынан һуңғы алһыу нурҙарын ергә мулыраҡ ҡойоп ҡалырға тырыша. Көн оҙоно ул да, һаран, ни уйлағандыр инде, хәҙер, эш уҙып барғас, барса донъяны матурларға, биҙәргә ашыға.

Әкәмәт был: кеше лә, мал да эңерҙә шәбәйә лә китә. Ҡаны ҡыҙамы, йоҡоһо осамы?

Ана, ауыл йәштәре лә волость идараһы эргәһендәге дүрт баҫҡыслы урыҫ-башҡорт училищеһына уйын әҙерләргә йыйылды. Төштән һуң,

уҡыу тамамланыуҙан файҙаланып, Йософ менән Зөләйха тураһындағы ҡиссаны сәхнәлә ҡуйырға самалайҙар.

Ата-бабаның ҡолағы ишетмәгән, күҙе күрмәгән хәл: сәхнәлә бүтән зат булып уйнамаҡсылар, шәриғәт ҡушмаһа ла, Сәйфетдин мулла башта тыйып маташһа ла, тыңламанылар. Хәтәр, донъяны үҙҙәренсә бормаҡсы йәштәр. Хәҙер заманы бүтән, власы башҡа шул. Ни теләйҙәр, шуны ҡылалар, уларға мулла һүҙе лә, шәриғәт тә һан түгел.

Был эште кем башлап йөрөй, тиһегеҙме? Ревтрибунал башлығы Зөфәр Ғайнановтың ирҙәүкә ҡыҙы Сәүиә менән учитель Бәхтейәр... Халыҡ большевик Ғайнановтың ҡыҙын өйәҙҙәге ҡыҙҙар гимназияһын тамамлап, сәсен ҡырҡтырып ҡайтҡаны өсөн “мәрйә Сәүиә” тип атаны. Шул мәрйә Сәүиә ойоштора... Уға кемдәр эйәрә? Айт иткәнгә тайт итеп торған йәштәр, Урыҫ Хөсәйен һымаҡ, Ҡазанда, Златоуста ғилем эстәгән, егерме бишен күптән тултырған, инде ир-егет ҡорона ингән Бәхтейәр...

— Был — мөхәббәт ҡиссаһы, йәмәғәт! — Ҡалҡыу кәүҙәле, һомғол һынлы, күҙҙәре уттай янып торған Сәүиә алғараҡ сыға. — Аңлайһығыҙмы? Был мөнәжәт уҡыу йә Сәйфи мулланың вәғәзе түгел — дәртлерәк, ҡыйыуыраҡ!

Алты-ете малай-шалай ҙа ике-өс бөртөк ҡыҙ-ҡырҡын сәүкә балаларылай мөйөшкә һырығышҡан.

— Йәгеҙ, йөҙөгөҙҙө асығыҙ! — Мәрйә Сәүиә тынмай. — Революция беҙгә нимә бирҙе? Азатлыҡ, хөрлөк! Хәҙер мосолман ҡыҙы ла баҙамай.

— Баш түбән дә йөрөймө? — Сәүиәнең әхирәт ҡыҙы Нәфиғә түҙмәне.

— Нәфиғә, ни һөйләйһең? Был сәнғәт тип атала, был — уйын ғына... Бәхтейәр, әйт! — Ҡыҙҙар башлығы мәрйә Сәүиә, яҡлау эҙләгәндәй, һонтор кәүҙәле, яғымлы сырайлы, ауылда иң сибәре тип һаналған Бәхтейәргә төбәлде.

— Нәфиғә, Сәүиә туташ дөрөҫ әйтә: беҙ спектакль ҡуябыҙ. Ҡазанда училищела уҡығанда Хөсәйен дуҫ менән дә күп сәхнәләрҙә ҡатнаштыҡ. Уның бер ояты-ние юҡ, беҙ бер кемде лә кәмһетмәйбеҙ. Ҡол Ғәли әҫәрҙәрендә йәштәрҙең яратышыуы, уларҙың төрлө ҡаршылыҡтар үтеп ҡауышыуы тасуирлана.

Тағы Сәүиә:

— Ҡиссаны баштан-аяҡ уҡып сыҡтыҡ бит, оноттоғоҙмо?

— Инәйемдәр ҙә әрләшә... — Нәфиғә башын ҡалҡытманы.

— Уларға әйтегеҙ: бер ниндәй ҡурҡыныс та юҡ, беҙ уйын уйнайбыҙ ғына. — Сибәр булыу өҫтөнә, мөғәллим булараҡ та ауылда ныҡ хөрмәт ителгән Бәхтейәр яғымлы итеп һөйләне, йәштәр уны ихлас тыңланы. — Беҙҙә киске уйындар, тауға сығып усаҡ яғып бейешеүҙәр бар бит — был да шул...

— ...Тик сәхнәлә уйнала, — тип йөпләп алып китте Сәүиә Бәхтейәр һүҙен. — Хәҙер власть башҡа! Мулла, мәзиндәрҙеке түгел! Яңы заман тыуҙы: революция, азатлыҡ!

Ҡыҙҙар һаман өндәшмәне, егеттәр ҙә күҙен йәшергән, хатта учитель Бәхтейәрҙең дә һүҙе бөттө.

Үткер Сәүиә, тынлыҡты боҙоп, алдындағы ҡағыҙына эйелде лә ҡысҡырып уҡый башланы:

Зөләйха әйтә: “Мин бит һине төштә күрҙем,
Шунан бирле һүрәтеңә ғашиҡ булдым,

Бар малымды, мөлкәтемде фиҙа ҡылдым,
Моратымды бөгөн хасил ҡылыйм инде".

Йософ әйтте: "Аулаҡ һарай биҙәгән ул,
Хурҙар* кеүек үҙе матур биҙәнгән ул,
Беҙҙе шайтан аҙҙырырға киҙәнгән ул,
Тоҙағынан һаҡла мине..."

Тик Зөләйха Йософҡа ныҡ ҡаршы килде,
Буй-һындарын маҡтап, мәҙех әйтә бирҙе,
Матурлығын берәм-берәм әйтә бирҙе,
Маҡтаған һайын маҡтай бара ине.

Зөләйха әйтте: "Әй миһырбан вә шәфҡәтле,
Холҡоң яҡшы, йөҙөң яҡты, һүҙең татлы,
Был һарайҙы мин төҙөттөм һин сифатлы,
Нәҡышәнә тик бер генә ҡара инде!"

Шунда һүҙҙе Нәфиғә ялғап алып китте:

Һиңә оҡшаш бер кемде лә белгәнем юҡ,
Бер миҙгел дә һинһеҙ сабыр ҡылғаным юҡ,
Һинән башҡа бер тын да алғаным юҡ,
Айырым булыу йәнгә тынғы бирмәй инде.

Яңы тыуған айға оҡшаш ҡаштарың бар,
Ынйыларға оҡшап торған тештәрең бар,
Ғәжәп матур мисек-йофар сәстәрең бар,
Үҙ ҡулдарым үрер өсөн лайыҡ инде.

— Нәфиғә, һүҙҙәреңде ятлағанһың, маладис! Ә, Кәли, һин — ялҡау! Бына ошо өҙөктө иртәгә ятла!

Фармандарын яуҙыра ғына был ҡыҙый! Әләмен баш өҫтөнә сөйгән, утлы ҡарашын алға атҡан яу башы!

— Яңынан ҡабатлайбыҙ! Йософ менән Зөләйха бер-береһенә ғашиҡ, Йософ, мөхәббәтен иҫбат итер өсөн, анау саҡлы илдәр гиҙгән... Зөләйха ары үҙен-үҙе тыя алмай.

Һирәк осрай торған ҡара бөҙрәләрең,
Үтә татлы вә шәфҡәтле һүҙҙәрең,
Күңелемде ала һинең бер күҙ һирпеүҙәрең,
Керфектәрең йәнем үтә сыға инде.

Һөйләшеүең үҙәк өҙгөс, һүҙҙәрең үҙ,
Буйың зифа, һының яҡшы, иңдәрең төҙ,
Аяҡ-ҡулың — гүзәл байлыҡ, был нурлы йөҙ...

— Ә Фәрхәт менән Ширин китабында... — Ҡапыл бүлмәгә килеп ингән дружинник егет Абдрахман хәбәр һала. — Фәрхәт мөхәббәт хаҡына тау-таш аҡтара, һыу юлын табырға тырыша... Вәт, ул батыр!

---

*Хур ҡыҙҙары.

— Абдрахман! Туҡта! Ниндәй Фәрхәт? Беҙ икенсе ҡиссаны уйнайбыҙ... Теләһәң, әйҙә, һин дә ҡатнаш!

Егеттәр пырх итеп көлөп ебәрҙе.

— Мин Фәрхәтте уйнарға теләйем!

— Беҙ әле Йософ менән Зөләйханы ҡуябыҙ!

— Уның Йософ булғыһы килә... — тине көлөүсе егеттәрҙең береһе.

— Минең батыр егетте уйнағым килә, — тип аҡланды Абдрахман.

— Беҙҙең Йософ бар, ул — Бәхтейәр... — тип сатната Сәүиә, — бүтән роль бирербеҙ...

— Ярай! — тип килеште Абдрахман.

Көлөшөү баҫылды, репетиция ары дауам итте.

Ҡайтырға йыйынғас, Абдрахман яңылыштан ғына Сәүиәгә тейеп үтте: “Тышта көтәм”, — тип шыбырланы. Тик тегеһе, сәркәш, ҡорт саҡҡандай, тертләне, әммә, иҫен йыя һалып: “Көтмә!” — тине.

Ҡыҙҙар бер-береһенә ҡаршты, Нәфиғә ҡолағынаса ҡыҙарҙы, ә бүтәндәр ишетмәмешкә һалышты.

— Уф, шул Әптерәйҙе, һағыҙаҡ кеүек... — тине Сәүиә, тышҡа сыҡҡас ҡына.

— Нимә? — тигән булды Бәхтейәр, аңламамыш булып.

— Абдрахманды әйтәм, арттан ҡалмай!

Сәүиә кинәт кенә наҙлыбикәгә әүерелде лә ҡуйҙы. Уға теймә лә, ҡағылма ла. Тирәһенән егеттәрҙе себен ише ҡыуа.

— Әйҙә, яр аҫтына! Яҡты бит әле, — тине егет алсаҡланып.

Бәхтейәрҙең йомшаҡ тауышы, ғәҙәттәгесә, ҡыҙға ыңғай тәҫьир итте. Өнһөҙ генә Иҫке Әй күле ярынан атланылар. Арттарынан шәүлә эйәрҙе. Берәү текмә буйына ышыҡлана-ышыҡлана барҙы.

Алдағыларҙың күңелен бүтән ғәм биләне. Күл дә шымған, ҡалын боҙ аҫтынан тыны ла сыҡмай. Остоҡ ел әҫәре лә юҡ. Яр башындағы тирәктәр һаҡ, бер сыбыҡ осо һелкенмәй. Туғай иңендәге төҫтәр ҙә ҡуйыраҡ һымаҡ.

Туҡтанылар. Күл буйын оҙаҡ күҙҙән кисерҙеләр. Әллә ниндәй, үҙҙәренә генә аңлайышлы уйҙарға тарындылар. Ахырында шулай тороуҙы үҙҙәре лә килештереп бөтмәне.

Ауылда ошолай яҡты күҙҙә ҡыҙ менән егеттең япа-яңғыҙ йөрөүе килешмәгән эш һанала, ә быларҙың иҫтәре лә китмәй. Хатта арттарынан берәйһе күҙәтәлер, тип тә уйламайҙар. Әгәр Абдрахмандың яҡында ғына боҫоп, тынын тотоп ултырыуын һиҙһәләр, нишләрҙәр ине икән? Тағы, Бәхтейәрҙең күршеһе Әхмәҙиә ҡарт та тәҙрәһенән сығырҙай, йәштәрҙе күҙе менән ашарҙай булып ҡарап ҡалды. Йәштәр уйын ҡорғанда өйөнә бер инде, бер сыҡты — үҙенә һис урын тапманы. Замана балаларының башҡа һыймаған был ҡылығын оҙаҡ аңдыны, кәңәш-төңәш итеү өсөн Сәйфетдин муллаға йыйынды.

Яр башында икәү генә. Киске һиллеккә ғажиз булғандар. Бары кис кенә, ауылда ғына шундай тыныс бер мәл булып ала. Атай-әсәйҙәр ҙә, бар донъя иҫтән сыға, ҡаршылағы тирәктәр ҙә, зәп-зәңгәр боҙ бите лә әҫәрләндерә. Тирә-йүн ап-асыҡ, ап-аҡ әле, тирәк түшендәге һырҙар ҙа беленә... Эңер яйлап ҡына үҙ хоҡуҡтарын яулай, офоҡ ситендәге шәфәҡ нурҙары һүрәнләнә. Йәштәр аҫҡараҡ төшә, теге шәүләнән нығыраҡ алыҫлаша.

Абдрахман да, атаһы Ғибат Ҡылысбаевтың ҡушҡан йомошон иҫләп, ҡайтыу яғына ҡайырылды. Тешен ҡыҫты, аяҡ аҫтына лысҡылдата төкөрҙө. Шулай ҙа бер урында оҙаҡ тапанды әле.

Эңер ҡосағына ышыҡланып, Әхмәҙиә ҡарт Сәйфетдин мулла өйөнә инде. Мулла аҡшам намаҙын атҡарып, урындығын йыйыштырып өлгөргән.

— Әссәләмәғәләйкүм, мулла!

— Вәғәләйкүмәссәләм, кем, Әхмәҙиә энем, һин түгелме?

— Мин, мулла тиңдәш...

— Йылы елдәр ташланымы, ҡыуан елдәр ҡыуалап килтерҙеме, энем? — Мулла, юрый “энем” һүҙенә баҫым яһап, үҙенең ололоғон иҫбатларға тырышты.

— Нисек тиергә, мулла тиңдәш? — Хәҙер һарыуы ҡайтҡас, тәҙрә төбөнән төшмәгән, ҡапҡа эргәһенән китмәгән еңмеш бай һорауға һорау ҡуйҙы. — Үҙегеҙгә мәғлүм ки, донъялар боларып тора, илгә жыйын* иманһыҙҙар тулды, улар иблис затынанмы, кафыр затынанмы — белмәҫһең, шул бер кафыр йырын йырлайҙар. Ахырызаман тыумаһа ярай ҙа, тим.

— Уныһы шулай, ҡушаға, иллә-мәгәр был һил, хозур кистә тикмәгә йөрөмәйһеңдер?

— Йәнем әрнеп, йөрәгем тулап, түҙә алмағас, һиңә килдем, күргәнем — күҙемә, ишеткәнем эсемә һыймай.

— Тағы ни ғәрәсәт ҡупты? — Мулла киҫә генә һорағандай итте, тауышы ҡырҡыу ине.

— Ишетмәнеңме, мулла тиңдәш, эңер алдынан ғына һауа ярған шаңдауҙы?

— Юҡ, мин намаҙ уҡыным...

— Әллә туптан аттылар, әллә таш аҡтарҙылар... — шаңдауы Ҡалатауға етеп, кире ҡайтты...

— Ишетмәнем. — Мулла киҫә һуҡты. Әхмәҙиә ҡушағаһының ғүмер баҡый шымсылыҡ иткәнен белгәнгә, тағы ла хәтәрерәк яңылыҡ көттө. — Ни йомош?

— Йомош, тип, мулла тиңдәш... Донъялар тыныс түгел, шаңдауы бер ҡотомдо алһа, йәштәрҙе ҡотортоп, анау мәрйә Сәүиә менән учитель Бәхтейәрҙең уйын ҡороуы...

— Һин Бәхтейәр учителгә теймә! Ул шәриғәттән айырылһа ла, шул уҡ һабаҡты бирә, ипле инсан. Минең уның менән бүлешер малым юҡ!

— Һин, тиңдәш, көфөр һүҙ һөйләйһең түгелме? — Әхмәҙиәнең дә асыуы ҡабарҙы. — Мин йәштәр, шәриғәттән көлөп уйын ойоштора, ен туйы әҙерләй, тим дә. Сәхнәгә менеп ҡыҙ балдар** үҙҙәрен рисауай итә, шыр яланғас сисенә! Мына эш ҡайҙа бара! Илдә иман бөтә, ахырызаман тыуа! Ир менән бисә уйын уйнай.

— Мин ни хәл итәйем?

— Кем тыя ул балдарҙы? Әҙәм күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән хәл — бер сараһын күр! Тора-бара мәсетеңде тартып алырҙар, аҙан әйтеүеңде тыйҙылар түгелме?

— Уныһы шулай. — Сәйфетдин мулла сүкте. — Бушбоғаҙ бәлшәүиктәр донъяны түңкәрҙе, халыҡты хаҡ юлдан яҙҙырҙы, — уларҙы нисек тыймаҡ кәрәк?

— Тыйыу түгел, ер йөҙөнән һепереп түгергә кәрәк ул иблистәрҙе! — Әхмәҙиә ҡарттың ирендәре генә түгел, бөтә тәне ҡалтыранды. — Өйәҙ яғында атышалар, шул бәлшәүиктәр менән һуғышалар кеүек миңә.

* Йыйын.
** Балалар.

— Мин дә көн дә Хоҙайҙан үтенәм, ялбарып доға ҡылам: ал шул иблистәрҙең боғаҙынан, таҙарт еребеҙҙе шул хәшәрәттәрҙән! Намаҙымда ла шуны ғына тылҡыйым.

— Көнө бер килер...

— Алла бойорһа...

— Шаңдау ҙа юҡҡа түгел, мулла тиңдәш... Мин бөтә ишетеп, аңдып йөрөйөм: тегендә атышалар, өйәҙ яғынан килә беҙгә ул шаңдау ауаздары!

— Бисмиллаһи рахманир рахим!

Был икәү тағы доғаларын ҡылып, юғарылағыға оло үтенестәрен белдереп, бит һыпырып, хуш итеп ҡуйҙы. Теләктәре беректе, уй-маҡсаттары ярашты. Ике алйыған ҡарт, ике тиҫтер шулай итеп булһа ла йыуаныс тапты был көндө.

## II

Мөхәммәткәрим бай йортон да яйлап эңер шойҡаны солғаны. Таш ҡойма менән уратып алынған ихата, емеш-еләк баҡсаһы, ихата уртаһында ике ҡатлы таш йорт ҡалҡа. Гүйә, белегеҙ мине, танығыҙ, был — Мәғҙәндәге иң шөһрәтле бай Мөхәммәткәрим хажиҙың өйө тип алыҫтан ҡуҡырайып ултыра. Гүйә, танымағандарға был һарай ҙа үҙенең кемлеген таныта ала, ул да аңһыҙҙы түше менән төртөп йыға ала. Мал эйәһенә оҡшай, тиҙәр, йорто ла хужаһына тарта икән: таш йорт эңер менән оҙаҡ яғалашты, һис бирешергә теләмәне, тирә-яҡтағы бүтән өйҙәр ҡараңғылыҡҡа һеңеп, күҙҙән юғалып бөттө, ә был һаман һерәйә, һаман күҙгә төшкән сүп һымаҡ ҡараштарҙы биләп тора.

Бейек, ҡалалағылай айырым ҡыйыҡлы күтәрмә, хеҙмәтселәр ҙә, эттәр ҙә һаҡлаған алғы яҡта урыҫ ҡапҡаһы, шунда әллә ниндәй ҡыңғырауҙар шылтырап китә.

Юлаусы, саҡырылмаған ҡунаҡ икәнен белгәс, түҙемле.

Шакир мулла үҙе лә Әптерәш ауылын дер һелкетеп тотҡан уҙаман. Олпат кәүҙәле, биленә етә яҙған ҡап-ҡара һаҡаллы, ҡаты күҙле. Текләберәк ҡараһа, ата ҡаҙыңды аунатыр, ҡолоноңдо билендәтер. Иман таяғына таянып алһа ла, үҙен тотошо старшиналарса: тауышы тау яра, күҙҙәре зәһәр сәсә, ярлы-ялпы ғынамы, бар әҙәм үҙенән ҡаҡшап бөткән. Аяуһыҙлығы, ҡанһыҙлығы бер сикте лә белмәй. Шуға һуңғы һүҙҙе ул әйтә, волоста хөкөмдө ул сығара.

Шакир мулла икеләнеү тигәнде белмәй. Әйтерһең, бөтә нәмәне алдан күрә, яңылышмай. Һүҙе — һүҙ, ҡылғаны — хаҡ, ҡарары — ҡанун. Нәк шундайҙар илдәге бөтә мәсьәләләрҙе хәл итә, донъяның яҙмышы, илдең көнө уларға бәйләнгән, уларҙың ихтыярынан хәҡиҡәт ярала... Бәлки ысынлап та шулайҙыр: Шакир мулла кеүектәр, ил яҙмышын хәл итә, улар иңендә — донъя йөгө. Улар илдәге хәл-әхүәлдәргә яуап бирә, төп йөктө күтәрә. Башҡорт иленең көнө бөгөн ҡайһы юҫыҡҡа тәгәрәргә тейеш, халыҡ ҡайһы тарафтан атлаясаҡ — быны әйтһә, Шакир мулла ғына әйтер.

Шакир мулла Мөхәммәткәрим байҙы ла шундай һайлам заттарҙан тип һанай. Шуға хәбәр алыу менән айғырҙарын ектереп ҡорҙашына ашыҡты. Күсерен дә алманы. Йән фарманға ҡыуҙы пар атын. Ҡара айғыры, эштең хәтәрлеген тойоп, алан-йолан ҡарана, күҙ бәбәге әллә ниндәй нур остоғо сағылыуына ялтлап китә. Ерәне ишенән ҡалышмай.

Бындай дөлдөлдәреңә ун ике саҡырым арамы!

Мөхәммәткәрим хажи донъя хәлдәре, большевиктарҙың хаттин ашыуы хаҡында уйланып ятты. Башы ҡатып, ҡаңғырып бөттө. Ҡыңғырау зыңлау менән аяғына баҫты, әллә нишләп, сабый бала кеүек, сәсәп тәҙрәгә йомолдо. Әллә өрктө, ҡаушап-ҡалтырап төштөмө? Күбәләй кәүҙәһе өлгөгә эйелде, быуындары ҡалтыранды, мейеһен ярып үткән тәүге уйы бер булды: “Ете төн уртаһында кем йөрөр?”

Айһыҙ төндә урамда пар аттан башҡа бер ни айырманы. Өңөнән өтәҫләп уятылған айыуҙай, доңҡ-доңҡ баҫып, салбарын эҙләне.

— Шакир мулла! Әптерәштән! — тип еткерҙе ялсыһы Хәйҙәр.

Оҙаҡламай хужа үҙе лә ихатаға төштө.

— Мөхәммәткәрим!

— Ҡорҙаш!

Хажи мулланы үҙенең иң төпкө бүлмәһенә алып инде, бисәләрен уятып торманы; юлсы ла “миндә тамаҡ ҡайғыһы юҡ” тип өҙә һуҡты.

Илгиҙәр икенсе ҡатҡа үткәнсе иҫһеҙ булды: бында шәһәр йорттарындағыса бүлмә өҫтөнә бүлмә, затлы йыһаз, шкафтар, комодтар. Өйәҙ ҡалаһында ҡыҙҙар йортонда ғына быңдайҙы күргәне бар ине мулланың. Шуға был Мөхәммәткәрим дә ундай урындарҙы урап уҙмағандыр, үҙе лә шуларҙан күсереп, ауылда шундай ҡырҡ бүлмәле, ике ҡатлы йорт һалдырғандыр, тип уйланы.

Тауыш алышманылар. Иң төптәге тәҙрәһеҙ-ниһеҙ бүлмәгә ингәс кенә, хужа ауыҙ асты:

— Ҡорҙаш, сисен, ҡымыҙ ғына килтерәм...

— Хуш... — тип өлгөрҙө төнгө юламан. Бүлмә-оя эсен байҡаны. Өҫтәлдә — етеле лампа, бер стена тотошлай китап кәштәһенән ғибәрәт; ҡалалағыса, комод өҫтөнә лә әллә ниндәй ҡағыҙҙар өйөлгән. Оло бүлмә уртаһында — тағы бер тәбәнәк түңәрәк өҫтәл, тирәһендә бер-нисә артлы ултырғыс һерәйә... Мулла дуҫының былай урыҫ кешеләре кеүек йәшәп ятыуына һис аптырамаңы. Хажи — эш кешеһе, юғары властар менән, сит халыҡ менән аралаша, ҙур мөлкәт менән эш итә... Был яҡтан тирә-әйләнәлә уға еткергән кеше лә юҡтыр.

— Тышҡа яҡтылыҡ төшмәйме? — тип белешкән булды мулла һүҙ ялғар өсөн генә.

— Хи, — тине хажи, сеүәтәләрен өҫтәлгә теҙеп. — Бында ел дә үтмәй, бынан бер өн дә сыҡмай — бейе, аҡырып йырла!

— Ярай.

Башта ултырып доға ҡылдылар.

— Алла бойорһа, дуҫ, хәтәр көндәр тыуырға тора... — тип һүҙ башланы мулла.

— Йә... — Мөхәммәткәрим хажи эш кешеһе ине, күп хәбәр сорытыуҙы элек тә өнәмәне.

— Кисә миндә өйәҙҙән поручик Рычагов булып китте...

— Тәк... — Хажи ҙа зиһенен үткерләне.

— Өйәҙҙә большевистик режимды ҡолатыу буйынса штаб ойошторолған...

— Ниһайәт! — Хажи урынынан тороп уҡ китте, ҡыҙыулыҡтан бүлмәне бер урап сыҡты. — Ниһайәт, высокоблагородиеларҙың башына барып еткән икән!

— Етәксеһе полковник Войцеховский, ти...

— Тәк...

Мөхәммәткәрим, тулҡынланыуҙан, әңгәмәне бүлдереп-бүлдереп ҡуйҙы, тыныс ҡына һөйләргә ирек бирмәне.

— Өйәҙ офицерҙары ойошоп штаб... центр төҙөгән, пландары оло...

— Тәк...

— Ҡой әле! — Мулла ҡыҙарынды-буҙарынды. — Иң мөһимен әйтмәнем әле... Высокоблагородие офицерҙар уянған, большевиктарҙың башын арттарына ҡайырыу өсөн атлыға; аныҡ ҡына пландары булғанға оҡшаған...

— Беҙ ни эшләргә тейешбеҙ?

— Поручик Рычагов Ҡаранторанда кәңәшмә ойоштора, һинең менән мине шунда саҡыра...

— Тәк...

— Ҡаранторандағы кәңәшмә 3 мартта буласаҡ, бөтә мәсьәләләр шунда хәл ителер, берҙәм эш итеү планы шунда билдәләнер, тине.

— Ниһайәт! Хоҙай бар икән, Шакир ҡорҙаш! — Мөхәммәткәрим хажи ишекле-түрле йөрөргә тотондо, һөйөнөсө эсенә һыйманы, сабый шикелле, усын ыуҙы.

Шакир мулла ла ҡәнәғәт ултырҙы, хәҙер генә үҙенең ете төн уртаһында бушҡа ат ыҙалатмауын аңланы.

— Аҙҙы бит был большевик хәстрүштәр! Ғибат йолҡошо нисек ҡылана! Ревтрибунал Зөфәре — ер кендеге! Наганын өҫтәлгә ташлап, контрибуция талап итә, мөлкәтеңде конфисковать итә — Хоҙай Тәғәлә биргәнме уға был хоҡуҡты?

— Улы Абдрахманы ла, дружина башлығы Вәлиуллаһы ла бер сыбыҡ менән ҡыуылған... Хеҙмәтсем Байрамғол: “Бер баҙға тултырырға ла өҫтәренә ут төртөргә!” — ти.

Мөхәммәткәрим дә олпатлығын юйҙы.

— Хәҙер ер бүләбеҙ тип йөрөйҙәр. Ерҙе, ысынлап та, тотошлай тартып алырҙар, уны ир енесе менән бисә енесе башына тигеҙ иҫәпләп бүлерҙәр!

— Ышанғы ла килмәй, хажи... — Шакир мулла тынын тотто. — Ер бит — төп хужаларҙыҡы, борондан быуындан-быуынға күсә килгән мөлкәт.

— Ыштаныңды ла һыҙырып алыр, бисәләреңде лә уртаҡ итер ул большевик хәстрүштәр — мына күрерһең! — тип ярһыны хажи.

— Бөтә халыҡты аяғүрә баҫтырҙылар, ҡырмыҫҡа иләүенә таяҡ тыҡтылар! Эштәре контрибуция, конфискация, продразверстка менән башланғайны...

— Һайлауҙар, опись имущества менән, тиң...

— Фронттан ҡайтыусы бушбоғаҙҙар илде болғатты. — Шакир мулла төкрөгөн сәсте. — Шулар ҡайтып волревком төҙөнө...

Тағы бер тына ҡымыҙ эскәс, олпат ил ағалары баҫылды. Икеһе лә эстән ҡыҙыу ҡанлылыҡ менән бер ни ҡылып булмаҫын, бала-саға кеүек ҡойма аша йоҙроҡ болғап ҡына май яҙылмаҫын төшөнә ине. Шуға һалҡын ҡанлылыҡ менән уй йөрөтөргә йөрьәт иттеләр.

— Хажи дуҫ, ул Ҡаранторандағы кәңәшмәгә тиклем беҙгә лә, үҙ башыбыҙҙы эшләтеп, үҙебеҙсә план ҡороп торорға кәрәкмәй микән? — тине мулла ғәҙәтенсә айыҡ аҡыл менән.

— Тәк... — тип һуҙҙы Мөхәммәткәрим хажи. — Үҙебеҙсә уй төйнәп тороу ҙа кәрәк булыр, дөрөҫ. Үҙебеҙ ни эшләй алабыҙ, нисегерәк эш итһәк, ҡулай булыр? Улар, өйәҙҙекеләр, үҙҙәренсә ҡайырыр... Төпкө уйға — мисәүҙәге атҡа ҡаршы төшөп тә булмаҫ, шулай ҙа...

— Беҙ ҙә нимәләр хәл итәбеҙ бит! — Шакир мулла төптән уйлап эш итеүсән бәндә ине.

Мөхәммәткәрим дә башын эшләтте.

— Беҙҙең дә үҙ планыбыҙ булырға тейеш!

Иң тәүҙә ҡоралланырға кәрәк тип һүҙ берегеште ҡорҙаштар.

— Волревкомдың дружинаһы һымаҡ үҙебеҙҙең отряд булһын! — тине Мөхәммәткәрим. — Ул саҡта беҙ эште үҙебеҙсә бора алабыҙ, ни уйлаһаҡ, шул барып сығыр.

— Хажи, миндә аттар етерлек — отрядты үҙем атҡа атландырам! — тип рухланды мулла. — Ә ҡорал йүнләүҙе Әпшәндән Мәликкә тапшырайыҡ... Әпшән — төпкөлдә... Эт тә белмәҫ, теге большевиктар темеҫкенеп тә йөрөмәҫ!

— Мәлик ҡоҙа ышаныслы инде...

— Ышаныслы! Үҙемә ышанған кеүек ышанам! Ул... — Шакир мулла иренен ҡымтыны.

— Тәк, ҡорҙаш, был эште икәү генә хәл итмәйбеҙ — жыйылып һөйләшергә кәрәк!

— Кәрәк! — тип килеште Шакир мулла, урынынан ҡалҡып.

— Киләһе йомаға килешәйек...

— Риза!

## III

Ҡылысбаевтар Мәғҙәндә иң боронғо ырыу тармаҡтарының береһе. Уларҙың нәҫел-нәсәбе, ейән-бүләләре әүәл-әүәлдән ошо оло урамда йәшәгән. Ошонда мал үрсеткәндәр, иген иккәндәр, бала баҡҡандар. Элек үҙҙәрен бик көслө нәҫел булған тип һөйләйҙәр, бик күп ер биләгәндәр, ишле ҡәүем булғандар, имеш. Тик Ғибаҙулла үҙен беләбелгәндән бирле байҙарға бил бөктө, ата-бабаһының да, туған-тыумасаһының да бүтән әллә ни маҡтаныр ере булманы. Хәйер, нәҫелнәсәбендең ишлелеге, фәҡирлеге менән генә кәперенмәһәң... Йәш сағында Дыуан урыҫтары араһында йөрөп алды, мәктәп ятағына йыйыштырыусы булып ялланғайны. Шунда урыҫса яҙырға, уҡырға өйрәнде. Һалдатҡа алынғас, был һөнәре үҙенә бик ярап төштө — фельдфебель иттеләр, писарь булды. Ләкин империалистик һуғыштан бер нисә бармағын өҙҙөрөп ҡайтты, шул арҡала үҙенә сулаҡ лаҡабы ла тағылды. Бирешмәне, донъя көттө, ғаиләһен ҡараны. Өйө лә, өй эсе лә бүтән ярлы-ябағанан һис бер ере менән айырылып торманы. Өҫтәл, ултырғыс кеүек йыһазды мәғҙәндәр электән үҙ итмәне, уның урынына — һике, йә, икенсе төрлө әйткәндә, һәндерә. Ашау, эсеү ҙә — шунда. Кисен, кейеҙ, кейеҙ етмәгән урынға һыйыр тиреһе түшәп, шунда бала-саға менән йәнәш тәгәрәйҙәр. Өҫтә лә, йоҡлағанда өҫкә ябынғанда ла тағы шул бер тире тун шәрәмәте.

Ғибаҙулла үҙе урмандан ҡайтып кермәй, бура бурай, ағас йыға, бисәһе ҡышҡы оҙон кистәрҙә етен иләй. Уға һуғылған етенде ботлап килтереп ташлайҙар, уныһы алғы яҡта тау булып өйөлөп ята — ҡыш сыҡҡансы шул тау ҙа юҡҡа сыға. Ә балаларҙың өҫтөндә — ҡырыҡ ямау киндер ыштан, киндер күлдәк. Йыуырға булһа, тегеләр, тимер мейес өҫтөндәге әйберҙәренең кипкәнен көтөп, шәрә көйө ултыра. Аяҡ кейем булмағас, яҙын ала ҡарҙан, көҙөн аҡ ҡар яуғансы яланаяҡ йөрөйҙәр.

Тормош ни ҡәҙәре генә башын эйҙерергә маташмаһын, ҡайһылай ғына ҡаҡмаһын-һуҡмаһын, Ғибаҙулла бөгөлөп-бөлөп төшмәне, байҙарға ла бик бирешеп барманы. Тамағы ас булһа ла, бүтәндәр кеүек тегеләр алдында түше менән ер һөрмәне. Ас тамағы, ғорур башы үҙенеке ине, кирелеге лә булғандыр. Мөхәммәткәрим бай уны “арҡыры кеше” тип йөрөттө.

Арҡыры кеше, ауыҙы тулы ҡан булһа ла, төкөрмәне, тешен ҡыҫып йәшәне. Уны, бәлки, урыҫса белеме лә шәбәйткәндер, кеше алдында шул да мәртәбәһен күтәргәндер? Шул уға үҙен кеше итеп тойорға, бәҫен төшөрмәй йәшәргә булышҡандыр?!

Йыш ҡына өйөнә кеше килә, яҙыу ярҙамы һорай, төрлө үтенестәр әтмәләшеүҙе үтенә. Ғибат баш тартмай, ауылдаштары араһында дәрәжәһе арта ғына. Кеше уны уҡымышлы, аңлы күрә, кәңәш-төңәш һорай. Фронттан ҡайтҡас, баһаһы тағы ла үҫте, партияла ағза ла икәнен белгәс, Хисмәтулла Ниғмәтйәновтар үҙен партячейкаға яҙҙы, советтарға һайлап ҡуйҙы. Шунда сулаҡтың етәкселек һәләте барлығы ла асыҡланды. Ғибат кешеләр менән һөйләшә, әңгәмәсеһен күндерә белә. Ә байҙарға мөнәсәбәтендә инде... унан да арҡыры кеше юҡ. Ғибат таштан ҡаты, тимерҙән ныҡ, ҡаялай тора ярлы хаҡы өсөн!

Башта ул комбед рәйесе ине... Һуңынан Мәғҙән волосында әллә нисә һайлау үткәрҙеләр. Өйәҙ ревкомында ла сыуалыштар булып алды, ревкомдың составын ҡатлап-ҡатлап һайланылар, был аҙаҡ сылбырҙай канткомға, волостарға төштө. Өйәҙҙең яңы ревкомы элекке кантком, волревкомдар составын оҡшатманы... Байҙар, эсерҙар, кадеттар, октябристар, крәҫтиән партияһы вәкилдәрен ҡыҫырыҡлап, Мәғҙән волосында ҡабаттан һайлау ойоштторҙолар.

Волостың был яңы съезында ғибаттар, ниғмәтйәновтар үҙ кешеләрен күберәк үткәрергә тырышты. Улар төрлө урындарҙан: “Власть — советтарға! Ваҡытлы хөкүмәт күптән ҡолатылды, власть — большевистик советтарға! Мәғҙәндә лә улар власы — яңыса власть һайланырға тейеш!” — тип ҡысҡырыштылар. Улар яҡлылар, ысынлап та, күп тойолдо. Башта халыҡ аптырап, шаңҡыбыраҡ та ҡалды.

Ул волость съезында Златоуст өйәҙ ревкомы вәкиле:

— Губревком ҡарары билгеле... — тип белдерҙе. — Бөтә ерҙә волость земстволары бөтөрөлә, элекке волость управалары таратыла, улар урынына яңы волость ревкомдары һайлана... Һеҙгә мин өйәҙ ревкомы ҡарарын килтерҙем, иптәштәр!

Ул ҡарарҙы уҡып сыҡты.

— Иптәштәр, был ҡарарға ярашлы, бөгөн Мәғҙән волосында эшсе-крәҫтиән Советтарының волость съезы йыйылды. Әле генә һеҙ илдә революцияны артабан тәрәнәйтеү һәм нығытыу тураһында информация тыңланығыҙ. Аңлашылыуынса, Рәсәйҙә аслыҡ, саботаж бара, немец империалистары һаман тынғы бирмәй, айырыуса революция бишеге Питер менән яңы баш ҡала Мәскәүҙә эш хөрт: халыҡ асыға, эшсе синыфы беҙҙән, крәҫтиәндән, ярҙам көтә. Беҙҙе бөтә донъя империализмы, эске контреволюция күрә алмай. Ошондай шарттарҙа өйәҙ ревкомы волостарҙа яңынан һайлауҙар иғлан итә. Был илдәге аслыҡты еңергә, яңы армия төҙөргә булышыр, тип өмөтләнә. Йәшәһен эшсе һәм крәҫтиән дуҫлығы! Йәшәһен бөтә донъя революцияһы!

Комбед рәйесе Ғибат Ҡылысбаев һуҙҙе яңыраҡ империалистик һуғыштан ҡайтҡан, ә уға тиклем Мәскәүҙә эшләгән, шунда большевиктар партияһына ингән Хисмәтулла Ниғмәтйәновҡа бирҙе.

— Ауылдаштар, кисә беҙ волоста партячейка төҙөнөк, мине уның рәйесе итеп һайланылар. Волость большевиктарынан яңы волость ревкомына мин түбәндәгеләрҙе тәҡдим итәм...

— Туҡтағыҙ әле! Ағай-эне, йәмәғәт! — тип урынынан Бәхтейәр учитель күтәрелде. — Көн тәртибен аныҡларҙан алда бер һүҙ рөхсәт итегеҙ, Ғибаҙулла!

Комбед рәйесе икеләнгәндәй итте: учителдә тыйһа, килешмәҫ, теге бар халыҡты үҙ яғына ауҙарып ҡуйыуы бар.

— Нимә, Бәхтейәр?

— Йыйылыш рәйесе, ауылдаштар! Өйәҙ вәкиле! — Оҙон буйлы Бәхтейәр учитель Урыҫ Хөсәйен кеүек урыҫса һөйләп алып китте. — Ауылдаштар, беҙ волоста яңы ғына һайлауҙар үткәрҙек түгелме? Йәшертен һәм туранан-тура халыҡ ҡатнашлығында волость управаһының яңы составы һайланды... Улар йүнләп эш башлап та өлгөрмәгән...

— Йүнләп эшләмәй ул управа, Бәхтейәр! — тип бүлде Ғибат учителде. — Шуға яңынан һайлайбыҙ!

— Большевик иптәштәр, һеҙгә, бәлки, уның составы оҡшамайҙыр — уныһы икенсе мәсьәлә... Беҙ уларҙы эшләтеп тә ҡараманыҡ бит, тағы: ғәҙел протокол өсөн, улар бөгөн бында саҡырылмаған, отчет тотмай...

— Етте!

— Дошман һүҙе һөйләй учитель!

— Долой!

Урындан да, өҫтәл артында ултырғандар ҙа ҡысҡырыша башланы, ә өйәҙ вәкиле русса тап-таҙа һөйләп торған бер ауыл уҡытыусыһына, бер комбед рәйесенә төбәлде.

— Ауылдаштар!

Бер мөйөштә өймәгешкән төркөмдән икәү ҡалҡты.

— Учитель дөрөҫ һөйләй!

— Был съездың хоҡуғы юҡ!

— Старшина ла, управа ағзалары ла саҡырылмаған!

— Ғәптелғәни! — Комбед рәйесе йәнә баҫты. Тауыштар баҫыла төшкән бер арала старшина улына өндәште. — Ғәптелғәни, шуны бел: был байҙар жыйыны түгел, был большевиктар съезы, ә уға беҙ әтейеңде* әйтеүҙе кәрәк тапманыҡ! — Ниһайәт, уҫал рәйес йыйын дилбегәһен ҡулына алды. — Шулай, ағай-эне, өйәҙ вәкиле алдында телегеҙҙе үлсәп һөйләгеҙ! Ниғмәтйәнов, дауам ит!

Аҙаҡ большевиктар съезы эше майланғандай китте, Мөхәммәткәрим хажи түҙмәйенсә йыйынды ташлап сыҡты. Уға эйәргән Аллаһийәр, Ғәптелғәни, Әхмәҙиә байҙар үҙ-ара йыйылып килеште.

— Яңы волость идараһын танымаҫҡа; игенде властарға тапшырмай ситкә оҙатырға!

Йәшертен был ҡорға Минтаһир старшина үҙе лә килеп етте.

— Ағай-эне, бысаҡһыҙ һуя был большевиктар, — ни ҡылабыҙ? Былай тик ятып булмай ҙа инде, бүренән ҡурҡҡан урманға бармаған!

— Ҡоҙа, тыңла: сәсәп бараһың... — Мөхәммәткәрим асыуланды.

— Сәсәмәй! Көпә-көндөҙ тотоп талайҙар ҙа, аҡыртып тапайҙар! — Старшина баҫылманы. — Волосҡа беҙ хужа түгелме хәҙер?

— Ҡоҙа, Минтаһир ҡоҙа, тим! Тыңла: беҙ былай хәл итәйек — яңы волость идараһын танымаҫҡа, иртәгә волосҡа барып был анархияны туҡтатыуҙы талап итергә!

*Атайыңды.

— Барам!

— Юҡ, һин бармайһың! — Мөхәмməткәрим тағы ҡыҙа төштө. — Һин — волость башлығы, старшина! Волость ҡағыҙҙары, мисәт, аҡса сейфы асҡысы һиндә. Һин эште яңы волревкомға тапшырмайһың, бөттөкитте. Аллаһийәр!

— Барам.

— Ғәптелғәни кейәү...

— Барам! Барам да Ғибат менән Ниғмәтйәновтың боғаҙынан алам...

— Шакир ҡорҙаш...

— Барам!

— Мин дә!.. — Мәрйәмғолдан Заһретдин түш кирҙе.

— Ярай! — тине Мөхәмməткәрим, кире урындыҡҡа сүгеп. — Ә мин... Өйҙә ҡалам.

Килештеләр.

Иртән Шакир мулланың тоғро кешеһе Байрамғол да берәүгә лә әйтеп тормай барҙы идараға. Яңы һайланғандарҙан — волревком рәйесе Ғибат Ҡылысбаев та, партячейка башлығы Хисмәтулла Ниғмәтйәнов та, ревтрибунал етәксеһе Зөфәр Ғайнанов та, волземком рәйесе Фәттәх Ғимаҙиев та, продкомиссия рәйесе Нафиҡ Ҡотдосов та, волревком сәркәтибе Нәбиулла Сәхәүетдинов та шунда ине.

— Әһә! Ана, үҙҙәре лә килә! — Сулаҡ Ғибат элекке идара кешеләрен күреп һикереп торҙо. — Ғәптелғәни, һиңә әйтмәгәйнек... ә әтейең киләме?

Волосҡа инеүселәр телһеҙ ҡалды, ул арала волревком рәйесе сулаҡ Ғибат дауам итте:

— Әтейең артынан да кеше ебәргәйнек, күрмәнегеҙме?

Шунда ғына аңғарып ҡалды килеүселәр: яңы идара иҫке идара ағзаларын волосҡа йыя, имеш.

Сулаҡ Ғибат һаман тынманы:

— Ғәптелғәни, әтейең идара эштәрен тапшырырға тейеш! Бөтә документтар ҙа сейфҡа бикләнгән икән...

Шунда Артҡы урамдан Аллаһийәр бай ярһып алға сыҡты. Ҡолғалай оҙон, көмрө кәүҙәһе алға эйелгән, күҙҙәренә ҡан һауған.

— Хаҡығыҙ юҡ! Беҙ — волость управаһының законлы ағзалары! Халыҡ тарафынан йәшертен һәм тура юл менән һайландыҡ. Әнә тора Шакир ағай, Мәрйәмғолдан Заһретдин... Старшина — Минтаһир ағай... Һеҙ — самозванецтар, властың баҫып алыусылар!

— Юҡ, беҙ — большевиктар! — тип үртәлеп әйтте партячейка рәйесе Ниғмәтйәнов. — Шуға ла большевиктарса эш итәбеҙ: байҙар, муллалар, капиталистар власын бер һелтәүҙә төбө-тамыры менән йолҡоп ташлайбыҙ!

Шуны ғына көткәндәй, Шакир мулла ла иҙән типте:

— Беҙ яңы идараны танымайбыҙ, кисә бер ниндәй ҙә һайлау булманы! Беҙ идара эшен, мисәтте тапшырыуҙан баш тартабыҙ!

— Долой, бушбоғаҙҙар! Беҙ — законлы власть! — Арттараҡ торған Байрамғол да сыҙамай өҫтәлде түңкәреп ебәрҙе.

Идарала бола ҡупты. Ғәптелғәни ҙә сулаҡ Ғибаттың буш еңенә барып йәбешкәйне, ә Шакирҙың яраны Байрамғол мөйөштәге туҡал ултырғысты күтәрҙе... Шунда идараға ауыр кәүҙәле, ҡыҙыу холоҡло дружинниктарҙың яңы башлығы итеп һайланған Вәлиулла Байназаров килеп инде.

— Туҡтағыҙ! Был ниндәй дау?

Был көр тауыш ике яҡты ла аҡылға килтергәндәй итте. Кисә генә төҙөлгән ревтрибунал рәйесе Ғайнанов та һынын турайтты.

— Әгәр волревкомда тауыш күтәрергә уйлаһағыҙ, бөтәгеҙҙе лә өйәҙ төрмәһенә оҙатам!

— Һин — йол-ҡош!

— Туҡта! — Дружина етәксеһе Вәлиулла Шакир муллаға һонолдо.

— Мына — волость писары! — тине шунда саҡ ҡына баҫыла төшкән Заһретдин бай, Аллаһийәр байҙың улы Шафиҡҡа төртөп. — Ул әйтһен!

— Беҙ яңы идараны танымайбыҙ, — тине ауылда ҡурҡаҡ йәнле тип дан алған Шафиҡ, күҙҙәрен сылт-сылт йомоп. — Шуға мисәтте лә, сейф асҡысын да тапшырмаясаҡбыҙ, ә, һеҙҙе ҡулға алырға тип, кантон милицияһына сапҡын ебәрҙек...

Шунда волость ишеге шар асылып китмәһенме! Тышта геүләшкән тауыштар ишетелде.

— Кафыр!

— Әйҙә, әйҙә!

— Эттән тыуған нәмә! — Старшина Минтаһир елкәһенән төйөүсе Абдрахманды һүгә-һүгә тупһа аша атланы. — Был ниндәй самоуправа? Ҡайҙа, йәмәғәт?

— Бына старшина үҙе лә килеп етте! — Волревком башлығы Ғибат терелде. — Минтаһир ағай, волревком исеменән, кисәңге волость съезы исеменән әйтәм: эшеңде тапшыр!

— Нимә? Нимә ишетәм мин? Һин аҡылдан яҙҙыңмы?

— Минтаһир ағай!..

— Кафырҙар! — Старшина ҡыҙарҙы-буҙарҙы. — Һеҙ тамуҡтан сыҡҡан ендәр... Ахырызаман...

— Һуңғы тапҡыр әйтәм! — Сулаҡ Ғибаттың тамағы ҡарлыҡты. — Әләйһә, һеҙҙе, элекке управаны, волревком дружинаһы ҡулға ала һәм өйәҙгә оҙата...

— Туҡта, кантон милицияһы килһен! Может һеҙҙе ҡулға алырбыҙ!

— Етте! — Ревтрибунал рәйесе Зөфәр Ғайнанов сәсрәп уртаға төштө. — Демагогия етте! Вәлиулла Бай!..

— Вәлиулла Байназаров, элекке волость управаһын ҡулға алырға! — Сулаҡ Ғибат Ҡылысбаев ҡабат власын ҡулына алды.

— Ағай-эне, туҡтағыҙ әле! — Шунда Шакир мулла араға төштө. — Нейә ғауғалашырға? Һәр эште килешеп, аңлашып эшләү фарыз! Әгәр кисә беҙҙе, элекке идараны, саҡырһағыҙ, был талаш булмай ине. Беҙҙе лә халыҡ һайланы бит!

Шул ваҡыта Шакир мулланың төплө дәлилдәре генә элекке идараны тотошлай тиерлек төрмәгә оҙатыуҙан йолоп ҡалды. Минтаһир старшинаға ла, бүтәндәргә лә, Мөхәммәткәрим хажиҙың үҙенә лә асыуҙарын эскә йотоуҙан башҡа әмәл булманы.

Көс кемдә, хаҡлыҡ та шуның яғында — был иҫке хәҡиҡәт, әммә уға һәр кем үҙенсә яңынан инанырға тейеш булып сыға.

## IV

Төнгө юлаусыны оҙатҡас та, тынысланманы хажи.

Мәғҙән үлек һымаҡ йоҡлай, донъя дөм ҡараңғылыҡ эсенә сумған. Мулла яйын белә, эт-ҡош күҙенә салынмаҫҡа тырышҡан. Күҙеңә энә менән төртһәң дә күрмәҫ бер төндө һайлаған...

Йәйрәп йәшәгән замандар үткән, яңы власть боғаҙҙан алып бара. Ер-һыуҙарҙы большевик атлы заттар баҫты. Үтә еңел ҡыланалар, һәр эшкә алдын-артын уйламай, йәһәт тотоналар. Бер йылда бөтә донъяны үҙгәртерҙәй, һәр йолҡошто бәхетле итерҙәй, бөтә әҙәмде тип-тигеҙ итеп ҡуйырҙай ҡыланалар. Хәс тә бер көн эсендә яңы тормош ҡоралар, меңйыллыҡ ағышын яңынан боралар, һәр кемгә шәп, бәхетле яҙмыш бүләк итәләр.

Башты ҡатырҙылар шул "революция", "батшаны ҡолаттыҡ" тигән һүҙҙәре менән. Әгәр ул революциялары башҡорт халҡына игелек алып килһә, батша ҡолағандан һуң халыҡ үҙаллы йәшәп алып китһә, үҙ ыңғайына тын алып ҡалһа, хажи үҙе лә ҡаршы тормаҫ ине ул революцияларына. Учредительное собрание йыябыҙ, тинеләр, бөтәһен Рәсәйҙә ғәҙел хәл итәбеҙ, тинеләр. Ә большевиктар үҙҙәренсә ҡайыра... Халыҡ өсөн көрәшәбеҙ, тиҙәр — халыҡтың һуңғы тәғәм ризығын тартып алалар, революцияларынан һуң уҡ продразверстка йәйелдерҙеләр, хәлле халыҡҡа — контрибуция, мөлкәтте конфискациялау... Большевиктар үҙҙәренсә эшләй, үҙҙәренсә ҡыландыра, тотҡан ерҙән һындырырға ярата. Уларҙыҡынса ғына булһын... Дөрөҫмө, түгелме? Уларса ғына барһын донъяһы... Бүтән бер кемде лә тыңламайҙар, бер кем менән дә иҫәпләшмәйҙәр. Маҡсаттарына ирешеү өсөн, теләһә ниндәй мәкер, алдау-йолдау юлына, буш вәғәҙәләр яуҙырыу юлына баҫалар... Милләттәрҙе үҙ яҡтарына ауҙарыу өсөн, күпме вәғәҙә бирҙеләр, күпме ташлама яһанылар! Уларға ышанырға мөмкинме? Мөхәммәткәрим ише хәллеләрҙе үҙҙәренә бик яҡынлатмайҙар, был власть ярлы-ябаға өсөн тип баралар... Ялҡау, бушбоғаҙҙар, күкрәк киреп, түш һуғыусылар власымы был? Көн һайын яңы закон, яңы указ, көн һайын байҙарҙы, урта хәллеләрҙе, хатта ярлыны ергә сүктергән фармандар яуа... Көпә-көндөҙ талайҙар, кантком ҡуша, өйәҙ ревкомы талап итә тип аҡланалар... Ыштанһыҙ итәләр, бөтә мөлкәттән яҙҙырмаҡсы булып ҡыланалар.

Стенаға килтереп терәттеләр ҙә, эшселәр асыға, Питер, Мәскәү асыға тип, халыҡтың һуңғы ыштанын систереп алалар...

Ни хәл ҡылырға, ниндәй генә бүтән сараларын табырға?

Мөхәммәткәрим хажи ҡаңғырҙы. Үҙенең ниндәй эшкә тотонғанын әле генә аңлап етте, буғай. Уның юлы большевиктарҙыҡынан айырыла, бынан һуң бүтән мәңгегә яҡынлаша, берләшә алмаҫтар. Хәтәр эш, хәтәргә тотона улар! Большевиктар үҙҙәре шуға мәжбүр итте!

Шакир мулла алдын-артын уйлап тормай, уйлаһа ла, бер ниҙән дә өркмәй. Мөхәммәткәрим дә әүәл Мәғҙәнде усында бейетеп тотто, Минтаһир ҡоҙаһы волость идараһы старшинаһы ине, ә Ғәптелғәни кейәүе һатыу итеү, ылау йөрөү менән булды, атаһының да, хажиҙың да һәр йомошон үтәне. Атаһы волосты ҡулында тотһа, уныһы ситтә йөрөп мал тапты, иккән игенде, тапҡан малды алыҫтарға сығарып оҙатты, ҙур-ҙур ҡалаларҙа сауҙа итте. Мөхәммәткәрим дә был эштең оҫтаһы ине, кейәүенә шөғөлөнөң бөтә нескәлектәрен өйрәтте, уны шул эшкә ныҡлап күнектерҙе.

Заманында ул үҙе был тирәнең данлы бер откупщигы булды, Силәбе, Златоуст, Өфө, Ҡазан, Һамар ҡалалары алдыра һатыу итте, баржаларға ашлыҡ, бүрәнә тейәп оҙатты, урыҫ байҙары менән ярышып, уҙышып йәшәне. Даны китте алыҫтарға, исеме таралды сит яҡ тарафтарға. Ҡайҙа ла уны белделәр, исем-шәрифен ҡайһы ерҙә лә танып торҙолар: Мөхәммәткәрим бит, Мөхәммәткәрим хажи... Хатта милләтен оноттолар, хатта ҡайһы яҡта тыуғанын белмәнеләр, ә Ҡариҙел,

Ағиҙел, Кама, Волга ярҙарында исем-аты яңғырап торҙо Мөхәммәткәрим байҙың. Шул кеше Мәрҙән ауылынан, шунда өйө-мөлкәте, донъяһы, мал-тыуары бар, ул шунда ҡайтып йөрөй, төп йәшәү урыны шунда, тиһәләр, бәғзеләр ышанмай ҙа торор, аптырап бер булыр ине.

Мөхәммәткәрим шәһәрҙәрҙә лә фатир тотто, шунда ла оҙаҡлап йәшәне, тик хәҙер, донъя боларғас, бөтәһенән яҙҙы, бөтәһенән ваз кисте, булған мөлкәтен, барыһын алтын аҡсаларға әйләндереп, бер урынға туплап, төйнәп ҡуйҙы. Сит ил банкыларына һалғанын ул иҫәпләмәй ҙә... Хәҙер хажи ярты йыллап Мәрҙәндән сыҡмай, Мәрҙәндә ҡәҙимге ауыл байы рәүешендә генә йәшәп ята.

Заманалар бик ныҡ үҙгәрҙе. Хәҙер уйланмаҫ ерҙән уйланырһың, самаламаҫ ерҙән самаларһың... Күнергә лә, сигенергә лә тура килә, был ығы-зығы үткәнсе, баш баҫып өңөндә ятһаң да була. Ығы-зығы үткәс, тормош һилләнгәс, баш-күҙ алыр, ары ни ҡылырын үҙе самалар.

Хажи аңлай. Әле уйлағаны, Шакир ҡорҙашының әлеге сәфәре һис шикһеҙ ҡан ҡойошҡа илтә, поручик Рычаговтар компанияһы илдә граждандар һуғышы асмаҡсы... Улар халыҡты уйлаймы, Рәсәй яҙмышы хаҡында һөйләйҙәр... Ябай халыҡты нишләтмәкселәр? Мөхәммәткәрим үҙе нишләргә тейеш, был мәхшәрҙән ситтә тороп ҡала аламы, ситтә торорға тейешме? Әлегәсә, мөлкәте яҙмышын уйлап, бер ни ҙә ҡылмай ултырҙы, көттө. Йәне көйә, большевиктарҙың ҡыланышына һарыуы ҡайнай ине... Тик ни эшләргә? Тағы илдә әллә ҡасандан тартҡылаш бара, граждандар һуғышы ла күптән башланған түгелме? Бай менән ярлы, мөлкәт менән мөлкәтһеҙ тартыша, урыҫ байы менән урыҫ фәҡире айҡаша, был башҡорт еренә лә килеп етте, башҡорто ла шуға ҡатышып китте. Улар үҙҙәренең яғын ҡайырып, ерле автономия иғлан итте, милли хөкүмәт төҙөнө, ғәскәр тупланы.

Был шарттарҙа Мөхәммәткәрим хажиҙың урыны ҡайҙа? Ул ни ҡылырға, ҡайһы яҡҡа баҫырға тейеш, әллә ике яҡҡа ла ҡатышмай, өндәшмәй ҡалырғамы? Тағы Мәрҙәндә лә волревком төҙөлдө, большевиктарҙың ҡыланышы ла хаттиндарҙан ашты, асыуҙы ҡабартты... Хәҙер бына өйәҙҙә офицерҙар ойоша, поручик Рычагов, полковник Войцеховский башлап йөрөй... Большевиктар бутҡаны бешерҙе, уларҙы ла ғәфү итеп булмай, власты ла тиҙ генә, еңел генә кире ҡайтармаҫтар! Тағы шул кафырҙарҙы ла ғәфү итеп булмай. Башҡорттарҙан сыҡҡан большевиктар ҙа шуларҙың йырын йырлай... Ғәфү итеп булмай уларҙы. Булмай! Ҡанға — ҡан, үскә — үс!

Улар власты ҡайырып алды! Тартып алдылар! Ә Мөхәммәткәримдәр кемдәр? Улар ҡайҙа? Уларҙың власын талап алдылар бит!

Мөхәммәткәрим хажи ҡурҡаҡ кеше түгел. Тағы: Мәрҙәндә унан да ҡанһыҙыраҡ бәндә бармы икән? Тик ул башһыҙ ҙа түгел, уйлай белә, самалай ала... Сабырлыҡ, аҡыл кәрәк. Саҡ ҡына түҙемлек етмәй — ҡалай итһәләр, хаҡ булыр?

Мөхәммәткәрим оҙаҡ уйланды, оҙаҡ баш ватты. Ул, асыуы ҡабарһа ла, әлегәсә үҙен тыйып килде, икеләнде...

Ул Шакир ҡорҙашы, Минтаһир ҡоҙаһы, Ғәптелғәни кейәүе, Аллаһийәр, Сәйфелмөлөктәр менән яуға күтәрелә, арттарынан бар волосты күтәрәләр! Улар, ниһайәт, башлай... Тағы — Ҡаранторан... Тирмән ташы инде эшкә егелгән түгелме? Дәү таш Биҙәртау түбәһенән түбән табан этелгән! Ҡаранторан, Мәсәғүт, Златоуст, Красноуфим — донъя бер Мәрҙән менән бөткәнме? Ул бер Мөхәммәткәримдең генә ихтыярына бәйлеме?

Әгәр ул ҡатышмаһа, туҡтап ҡаламы? Мөхәммәткәрим хажи ҙа шул даръяға ташлана, шул өйөрмәгә ҡушыла. Унын да бүтән әмәле юҡ.

Мәғҙәндә Мөхәммәткәримде бөтәһен дә алдан күрә, шуға абынмай, икеләнмәй тип һананылар. Ул һаман башын баҫып ултырҙы, һаман самаланы, хатта уйҙан, хафанан мейеһе ҡайнап китте. Тирә-әйләнәләге хәл-әхүәлдәрҙе ишеткәс, ҡорҙашы Шакир мулланан да ошондай хәбәр алғас, тағы большевиктарға талағы ташты. Хисап көңө тыуҙы түгелме? Барыбер маңлайға-маңлай сәкешмәй ҡалмаҫтар! Йә улар, йә тегеләр... Йә иҫке тәртиптәр яңынан ҡайтыр — шөкөр; әгәр абынып ҡуйһалар, юлдан тайһалар... Тағы бөтәһе лә Хоҙай хөкөмөндә; инде барыбер тирмән ташын туҡтатып булмаясаҡ, хатта Мөхәммәткәрим хажиҙың да бынаһы ҡулынан килмәй! Юҡ, ул ситтә ҡала алмай, ул йә әүәлге тәртиптәрҙе кире ҡайтара, йә шул юлда ҡорбан була! Башта хас дошманының муйынын өҙөп өлгөрә...

Талағы ташыуҙан башы һыҙлап китте хажиҙың, күҙ алдында һаман теге һуңғы волость съезы торҙо.

V

Атанан күргән уҡ юнған, әсәнән күргән тун бескән. Ғибаттың оло улы Абдрахман да тас атас: ҡарағайҙай төҙ һынлы, сылт ҡара сәсле егет. Атаһына ҡарағанда ла үҙһүҙле, еңмеш бер бәндә. Сая, аҙағын уйлап тормай, тота ла эш ҡыйрата... Шул яндырай холҡо менән үҙен әллә ниндәй бәләләргә тарытҡаны бар — һис дәрте ҡанмай, һис тыйылмай. Мөхәммәткәримдең уртансы ҡыҙы Бибисара ҡалала уҡып ҡайтҡас, тиҫтер күрше егетен танымай ҙа торҙо. Ҡайһы арала буй еткергән был Абдрахман?

— Ҡәләмдәй төҙ һын, осҡонло күҙҙәр — ут егет! — тип, Нәфиғә әхирәте менән сер бүлеште.

— Абдрахман элек тә Оло урамдың бер егете ине... Әллә һин уға ғашиҡ булдыңмы?

— Юҡ. — Иркә Бибисара ҡырт киҫте. Артығын ысҡындырғанын тойоп, телен тешләне. Нәфиғәне үсектергән кеүек булды, әхирәтенең күңелендәгеһен ул һиҙмәйме ни?

— Абдрахман, белгең килһә, анау Ҡуянсыҡ урамы Зөфәрҙең мөғәллим ҡыҙы Сәүиә артынан саба!

— Кит!

Һалды хәбәрҙе Нәфиғә, йөрәген яндырып, тәтелдәүендә булды.

— Абдрахман әтеһе — коммун Ғибат артынан эйәрә, волкомда ниндәйҙер ҙур эштә эшләй...

— Мине политика ҡыҙыҡһындырмай, Нәфиғә, ҡалала ла шунан туйып бөттөм: большевиктар, меньшевиктар, Временное правительство, Учредительное собрание — ҡапталып китһендәр. Әнә, әтейем дә шул политика тип... — Тағы артығын ысҡындырҙы ҡыҙ. — Беҙ, әхирәт, бисә енесенән, беҙгә ғаилә, мәғариф, халҡыбыҙ мәҙәниәте хаҡында уйларға кәрәк!

— Улайһа, әйҙә, училищеға бар, балалар уҡыт, Бәхтейәр учитель, Сәүиә мөғәллимә менән бергә эшлә! Беҙ аҙна кис һайын уйынға йөрөйбөҙ — мөхәббәт ҡиссаһы ҡуясаҡбыҙ!

— Барам! Сәүиә менән Златоуста гимназияны бергә бөттөк, Бәхтейәр шунда беҙгә инеп йөрөнө...

— Бәхтейәр учителде йәштәр ярата...

— Бәхтейәр... Ул училищела мөдир бит әле?

— Әйе, мөдир... Һине эшкә алыр ул? — Нәфиғә шикләнгәндәй итте.

— Алырға тейеш, — тине Бибисара, тағы уйсанланып. — Элек ул беҙгә йыш килә торғайны... Әтейем менән һөйләшә...

— Һине уҡытты ла, шай...

— Миңә дәрестәр бирҙе... Әй шуны... — Тағы ҡыҙ ҡул һелтәне. Нәфиғә лә ауыҙын йомдо. Ул ниҙелер һиҙенә ине, буғай.

Бер аҙҙан Бибисара тағы үҙ алдына һөйләнгәндәй әйтеп ҡуйҙы:

— Бәхтейәр йәмән, фәлсәфә һатырға ярата; тағы, һәр аҙымын үлсәп баҫа — словом, интеллигентщина!

Нәфиғә өндәшмәне. Ул аҡыллы ҡыҙ — асыҡ-яран түгел, юҡ-бар хәбәр сурытырға яратмай. Әле Бибисара өйәҙ ҡалаһы Златоустан ҡайтып төшкән тигәнде ишеткәс, әхирәтенең хәлен белешеп ингәйне. Нәфиғәнең бер генә етешһеҙлеге бар: теге мөғәллимә Сәүиәнән Абдрахманды көнләшә. Ул, бисара, шул албарман тип һарғая.

Икенсе көн Бибисараның атаһы Мөхәммәткәрим бар кешеһен урманға ҡыуҙы. Әйҙә боҙ тотҡан саҡта йығылған ағасты ташып ҡалырға кәрәк! Урмандағы ағас Хоҙай ҡулында, һарай эсенә инеп ятҡаны ғына — һинеке. Ағастың күп өлөшө яҙғы ташҡында һаллап оҙатыла, әлбиттә, ә йылға үренә, Златоуст, Силәбе яҡтарына ылау менән ташырға кәрәк. Мөхәммәткәрим ашлыҡ менән генә түгел, ағас менән дә сауҙа итә, йылҡы һарайҙарын да яңыртаһы бар, төҙөлөшкә лә күп ағас китә. Һаман хәленсә донъя ҡыуа, буранлап, көндәр боҙолоп, тормоштоң рәте-сираты китеп торһа ла, ҡуймай. Яңы власть оҙаҡҡа бармаҫ, барыбер иҫке тәртиптәр кире ҡайтыр, тип тә өмөтләнәләр.

Урман эше ауыр, ҡулалмаш тотонмай булмай. Шуға бөгөнгә Мөхәммәткәрим Минтаһир ҡоҙаһынан да унлап ылау һораны. Ылаусылар менән ҡуша бирҙе ҡоҙа саналарын... Арылағастан, алыҫтан таңдан төшөп ылау башланылар.

Әлбиттә, хажиҙың ылау-ылау бүрәнә ташыуы волкомсылар иғтибарынан ситтә ҡалманы. Ғибат үҙе лә хажиҙың асырғанып урман төшөүен күрә йөрөнө, ахырҙа сыҙаманы.

— Беҙ байҙың мөлкәте иҫәбен алдыҡ, уны социалистик халыҡ милке тип иғлан иттек, ә тегеләр, совет власы ҡыҫымын тойопмо, ҡотороп сауҙаға тотондо. Мөхәммәткәрим хажи, ашлыҡ менән генә сауҙа итеүге етмәгән, хәҙер урманға керешкән — Арылағастағы дәүләт фондынан ағас йығып, шуны ситкә оҙата.

Волком рәйесе Ҡылысбаев хаҡлы түгел ине. Волком йоҡламай, күҙ ҙә йоммай, ә өлгөрмәй. Баштан уҡ өйәҙ, кантон органдары волость алдына ашлыҡ, мал-тыуар әҙерләү бурысы ҡуйҙы. “Үҙәктә эшселәр асыға, бөтә көстө — продразверсткаға!” тип иғлан ителде. Аҙыҡ-түлек комиссияһы рәйесе Нафиҡ Ҡотдосов көн-төн шул фарманды үтәйек тип саба, комиссияның башҡа ағзалары ла ал-ял белмәй. Ә Хисмәтулла Ниғмәтйәнов дуҫтың партячейкаһы халыҡ араһында аңлатыу эшен йәйелдерҙе, ер бүлеге сәсеүлектәрҙе бүлеү, байҙар, ҡаҙна ҡарамағындағы сабынлыҡтарҙың, урмандарҙың иҫәбен алыу менән мәшғүл.

— Ике ҡул да етмәй, — тип көләмһерәй ер эштәре бүлеге рәйесе Ғимаҙиев. — Шулай ҙа беҙ лесник Фәхрәзи менән урмандарҙың техник картаһын ҡарап сыҡтыҡ, утынға йығылаһы делянкаларҙы билдәләнек.

— Ә Мөхәммәткәрим ташыған ағасты конфисковать итергә кәрәк! — Волком башлығы икеләнмәне. — Бер өлөшөн ярлыларға таратырбыҙ...

— Уныһы шулай, Ҡылысбаев иптәш... — тип һуҙҙы Ғимаҙиев. — Тик Мөхәммәткәрим ул ағасҡа документты элекке управанан алған, аҡсаһын да декабрҙә уҡ түләп ҡуйған...

— Бер кешегә шул тиклем ағас! Мөхәммәткәрим уны үҙенә түгел, ә һатырға йыға... Уға еткелегеген ҡалдырабыҙ ҙа...

— Килештек, — тине волземком Ғимаҙиев, дәртләнеп.

Төштән һуң ул бай ихатаһында ине. Бүлек ағзалары менән урмандан ҡайтҡан ағас иҫәбен алырға йыйындылар.

Хеҙмәтселәр урыҫ ҡапҡаһын асмай маташҡас, волкомсыларға ярҙамға тип ебәрелгән дружинник Абрахман ҡаршыһына ташланған этте атып йыҡты.

— Әһә, шәп! — тип ҡеүәтләне егетте волземком Ғимаҙиев. — Мөхәммәткәрим бай заманында ҡаршы өрөп сыҡҡан эттәрҙе атып йыға торғайны — шул төҫ ҡап ҡорһаҡҡа, хәҙер белер...

— Ул ни этте атып йыға ла хужаһын волосҡа саҡыртып штраф һалдырта.

— Беҙгә лә шулай итергә кәрәк!

Егеттәр көлөштө.

Атыу тауышын ишетеп, Мөхәммәткәрим үҙе өтәләнеп килеп сыҡты, хеҙмәтсеһе Хәйҙәр артында ҡалтырап тора.

— Кемдәр көпә-көндөҙ атыша? Һа, Аҡтырнаҡты... — Бай ҡапҡаһын шар асып ебәрҙе. — Бәй, Фәттәх, был ни эшең? Көпә-көндөҙ кеше таларға килдеңме?

— Мөхәммәткәрим, бына волревком ҡарары, Арылағастан ташыған ағасыңды күрһәт!

— Уны ла...

— Уны ла конфисковать итәбеҙ!

— Энем, минең документ бар, аҡсаһын волуправа кассаһына түләгәм, мына! — Хажи усында ҡағыҙҙарын ялпылдатты. — Бөтәһе лә законлы!

— Беҙ яңы ҡарар сығарҙыҡ: һин ағас менән сауҙа итәһең икән, ә был — хәҙер дәүләт милке. Үҙеңә еткән өлөштө ҡалдырабыҙ ҙа, артығын ярлыларға таратабыҙ! — Фәттәх Ғимаҙиев ҡоро һөйләште.

— Хоҡуғың юҡ! Был ағас — минеке, аҡсаһы кассаға түләнгән... — Һыуыҡта хажиҙың тамағы ҡарлыҡты, волком вәкилдәре уны тыңламаны.

Был ваҡытта икенсе ҡатта йомшаҡ түшәктә бай ҡыҙы Бибисара йәш түкте. Ул да, атаһы кеүек, юғарынан Абдрахмандарҙың өй баҫып инеүен күҙәтте. Абдрахман, Хәйҙәр ҡапҡаны асмағас, Аҡтырнаҡты атып йыҡты, атаһы ҡапҡаға ташланды, Бибисара йәшенә төйөлдө. Абдрахман тиҫтере, ана, нишләй? Яраткан этен, Аҡтырнағын әрәм итте, ҡанһыҙ! Асарбаҡ Ғибат балаһы! Ҡан эскес большевиктар ҡоро! Эттән былай ҡотороп, урам олотоп, кеше талайҙар!

Һылыуҡай тыйылманы. Был көндө гүйә тәүләп хәтәр ысынбарлыҡты үҙе күрҙе, өҫтөнә гүйә күк емерелеп төштө.

Был көндә бай әүене артынан 217 кубометр ағас тартып алынды һәм кисекмәй волость ярлыларына бушлай таратылды. Бай Арылағаста ҡалған ағасына ла ҡул һелтәне, тешен ҡыҫып, уртын сәйнәп, ҡанһыраған йыртҡыстай өңөнә боҫоп ятты.

Арылағастағы ағасты ла иҫәпкә алды комитетсылар. Айырата дружинасы Абдрахман бәйҙәге эттән дә былай ҡоторҙо.

## VI

Элекке волость идараһы ағзалары яңынан осрашып һөйләште. Был юлы уларҙы йәшертен рәүештә Шакир мулла Әптерәшкә йыйҙы. Ҡаранторан кәңәшмәһе алдынан да кәңәш-төңәш төйнәйһе бар ине.

— Волость ҙур, бөтәбеҙ ҙә бер төптән торорға тейешбеҙ! Һәр ауыл өсөн берәү яуаплы... — тине мулла, кәңәшмәне асып.

— Дөрөҫ! — тип килеште бүтәндәр.

— Әптерәште үҙ өҫтөмә алам. Байрамғол, мин...

— Әпшәндә?..

— Мин!

— Мәлик дуҫ... Мәрйәмғолда — Заһретдин, һин!

— Эйе...

— Сапҡынды үҙең билдәләрһең!

— Беҙгә үҙебеҙҙең штаб кеүек нәмәне булдырырға ине, — тине хажи.

— Кәрәк! — тип ризалашты Шакир мулла. — Әле аталған инсандар штабҡа ла керә...

— Штаб, моғайын, Мәғҙәндә, минең өйҙә булыр... — Берәү ҙә ҡаршы төшмәне, хажи хәбәрен ары теҙҙе: — Бик һаҡ эш итергә тейешбеҙ, ағай-эне, әлегә беҙҙең уй-ниәт тураһында — ләм-мим!

— Һәр кем менән айырым һөйләшергә, һәр кешенең эс бауырына инергә...

— Һәр аҙна һайын штабта осрашыу фарыз...

— Ағай-эне, — тине Мөхәммәткәрим хажи, йомғаҡлағандай итеп, — бик хәтәр эшкә тотонабыҙ, бөтәгеҙ ҙә быны аңлайҙыр. Волосты большевик хәстрүштәрҙән таҙартырға кәрәк. Эш бер Мәғҙән менән генә бөтмәйәсәк... Волоста отряд төҙөргә!... Отряд командиры бурысын үҙ өҫтөмә алам. Штаб башлығы — Шакир мулла...

— Хуп... — тиештеләр. Тауыш биреп, сходтағыса һайланышып маташып торманылар.

Шакир мулла доға ҡылды.

— Амин! — тип артынан ҡабатланылар.

— Ҡаранторан тураһында әлегә мин берәүгә лә өндәшмәнем, — тине Шакир мулла, хажи менән икәү генә ҡалғас.

Советтарҙың көсө дружиналарында тип ҡат-ҡат тылҡыны хажи яҡындарына. Большевиктарҙың дружинаһына ҡаршы уларҙың да үҙ отряды булырға тейеш!

Мөхәммәткәрим хажи Мәғҙәндә үҙ отрядын төҙөйәсәк, волостан большевиктарҙы һепереп түгәсәк! Ниһайәт, ул баш ҡалҡытырға йөрьәт итте!

## VII

Мәғҙән халҡы был боларыштарҙан туйып бөткән. Һәүетемсә йәшәп ята, уға бүтәне кәрәкмәй. Байы ла, ярлыһы ла үҙ урынында кеүек; ни дәүерҙән шул бер көйгә көйләнгән тормош... Бәғзеләре туҙынып, күкрәк

төйөп ала, кеше хыялланмай ҙа булмай, берәҙәк етештең донъяһына ҡыҙыға. Тағы аҡса күктән яумай, алма үҙенән-үҙе бешеп ауыҙға төшмәй — тамаҡ туйһын, өҫ бөтәйһен өсөн дә тырышырға, тир түгергә кәрәк.

Ҡайҙандыр большевик тигәндәре килеп сыҡты ла донъяны болғатты, кешеләрҙе ике яҡҡа айырҙы. Улар "азатлыҡ", "ирек", "хөр тормош" тигән матур һүҙҙәр һөйләне, байҙарҙы хурлап ләстит һатты... Улар яр аҫтынан сыҡты ла иҫкәрмәҫтән бар донъяны баштүбән итте: муллалар — алдаҡсы, бай — яман! Муллаларҙы ҡыуайыҡ, байҙарҙың малын талайыҡ, шунан тормош тигеҙләнер.

Сәйфетдин мулла ул кешеләрҙе тамуҡтан сыҡҡан иблистәр тип атаны. Икенсе төрлө ер ҡорттары була инде. Улар халыҡты юлдан яҙҙырмаҡсы, диндән айырып, кафырға әйләндермәксе... Бар мөлкәтте уртаҡ итәләр, ул ғынамы — хәләл ефеттәрҙе бүлешәләр — вәт, яңы заман тыуа. Ахырызаман тигәндәре нәҡ ошо була инде.

Шакир мулла үҙ Әптерәшендә лә йома намаҙы һайын шуны тылҡып туймай:

— Аҡ батша ғали йәнәптәренә ҡул күтәргәндәрҙең ҡулы ҡорор, һүҙ тейҙергәндәрҙең теле һулыр! — Мәсет мөнбәренән тороп, һауаға ҡулдарын ора ти. — Ярмандарға һатылған, ярым кафыр, ярым немес тигән башлыҡтары халыҡты ҡоторта. Ышанмағыҙ, йәмәғәт, аҙғын бәлшәүиктәр һүҙенә!

Шунан тауышын кәметә төшөп, тирә-яҡҡа күҙ йүгертә.

— Ҡаф тауҙары артында ла түгел, юҡ үҙебеҙҙең Уралда көс туплана бөгөн. Ырымбур тулыһынса казак атаманы Дутов ҡулында тигән хәбәр бар. Сиратта — Өфө, Силәбе, Златоуст. Аллаһы Тәғәләнең амин тигән сағына тура килһә, беҙ ҙә оҙаҡламай ул бәлшәүик шайтандарынан ҡотоласаҡбыҙ. Хоҙай игелеге киң, йәмәғәт, тик көнө генә бөгөн түгел.

Әүәлерәк Сәйфетдин мулла ла мәсеттә шуны тылҡыны. Халыҡ уны ярата ине. Мәғҙәндәр ҙә кафырға һатылған был заттарҙы күрә алмай, большевиктарҙы бер иблис заты һанай. Большевиктар халыҡҡа ят, әллә ҡайҙан килеп сыҡтылар. Элекке волость идараһы һәүетемсә эшләй ине. Кешегә зыяны теймәне, һәр мәсьәлә ауыл сходында хәл ителде... Власҡа большевиктар ултырғас, һайлау артынан һайлау, төрлө хәбәр, болғаныш китте. Гүйә тын ғына аҡҡан Әй һыуын болғандырҙылар.

Халыҡ үҙгәрештәрҙе лә, яңы власты ла ҡабул итмәне. Хәҙер шуға халыҡ үҙе башҡа, ә яңы власть үҙенә башҡа йәшәне. Элекке берәҙәк бәндәләрҙең баш осонда ҡояш балҡыны, етем-еһер, тинтәк күтәрелде: уларға ат, ағас вәғәҙә иттеләр, байҙарҙың малын бүлеп бирәбеҙ, шулай барыһының мөлкәтен тигеҙләйбеҙ, тинеләр. Малһыҙ, өйһөҙ, бисәһеҙҙәр тантана итте, эт ялҡауҙар ирек, хөрриәт тип тамаҡ йыртты.

Һәүетемсә донъя көткән, билен яҙмай эшләп, мал тапҡан, мөлкәт йыйған аптырап ҡалды, түш төйгән, эш һөймәгән, кәсеп рәтен белмәгән әллә кем булды, большевик яҙылды.

Етем-еһергә, берәҙәккә яҡлау булған большевик крәҫтиәнгә баш таяуына әйләнде, тегеләрҙең дәүер-дәүер көйгә һалынған тормош ағышын боҙҙо.

Тегендә, волость идараһына оялаған яңы кешеләр яҡты киләсәк, хөр тормош хаҡында хыялланды, көн-төн ҡағыҙҙан баш ҡалҡытманы, ә ерҙә йәшәүселәр, әүәлге көндәренә күнеп, элеккегә сат йәбешеп ятты.

Көнө-төнө өгөт-нәсихәт туҡылһа ла, крәҫтиән большевикты аңларға теләмәне, һаман бөткөһөҙ йыйылыштарҙағы һүҙгә түгел, ә ауыл эсендә йөрөп ятҡан ғәйбәткә ышанды.

Большевиктар халыҡ тип тырышты, халыҡ өсөн тип көрәште, ә ҡара халыҡ һаман шул изгелекте ҡабул итмәне.

## ИКЕНСЕ КИҪӘК

### I

Шул бөткөһөҙ бәхәстән ялҡып китте Бәхтейәр.

Тышта саф һауа, һибәләп ҡар яуа. Бихисап-бинаһая йондоҙсоҡтар булып күк йөҙөнән ергә ҡар бөртөктәре ағыла. Иҫ китккес аҡ донъя. Иркенлек, сафлыҡ. Бәхтейәрҙең күкрәге киңәйеп, тын алыштары иркенәйеп китте. Бынау көндә ҡустыһы менән һүҙ көрәштереп өйҙә ултыра.

— Бәхтейәр абзый, һин кем яҡлы? Бәхтейәр абзый... Инде хәл итергә тейешһең, ниһайәт, баррикаданың ҡайһы яғына булһа ла баҫырға кәрәк!

Шул өндәр ҡолаҡ төбөндә ҡыңғырауҙай һуға, әсәһе Миңдебикә ҡарсыҡ та уландарын тыйып арыны, орсоғо менән тетелгән йөн тубалын ҡосаҡлап күршеләргә сығып китте.

— Бәхтейәр абзый, ер шарының бер мөйөшөндә мировой революция пожары тоҡанды, уны Ленин, Троцкий етәкселегендәге большевиктар тоҡандырҙы. Аңла: халыҡтың меңәр йыллыҡ хыялы бойомға аша — хөрлөк, тиңлек көнө тыуа. Күпме аҡыл эйәләре шул хаҡта хыялланды, шул көндө көттө! Ә беҙ ул тарихи мәлде үҙ күҙҙәребеҙ менән күрәбеҙ, шул тормошто үҙ ҡулдарыбыҙ менән төҙөйбөҙ! Шуға ла мин партияға индем, ә һин...

— Большевиктар икеләнмәй, улар тотҡан ерҙән һындыра ла ҡуя. Улар өсөн был буталсыҡ тормошта бөтәһе лә ап-асыҡ...

— Абзый, тормошта ағы бар, ҡараһы бар, байы бар, тағы ярлыһы — шунда нисек буталаһың инде?

— Платон Македонский алдына сырмалған йомғаҡ һалған. “Шуны тағат, тәғәйен бер еп осон тап”, — тигән...

— Ә тегеһе нишләгән? Ҡылысын ҡынынан һурып сығарған да йомғаҡты урталайға сапҡан — дөрөҫ тә эшләгән!

— Вәлиулла энем, һеҙ ҙә шулай: алдын-артын уйламайһығыҙ, тотаһығыҙ ҙа сабаһығыҙ!

Волком ағзаһы ҡашын төйҙө.

— Бәхтейәр абзый, һин һаман беҙҙе, большевиктарҙы, тәнҡитләү менән булаһың, һаман эсерҙар менән кадеттар араһында буталаһың...

— Мин уларҙың бөтә программаларын да яҡламайым, килешкән саҡтарым булды... Мәҫәлән, кадеттарҙың хөкүмәт, идара аппаратын реформалау тәҡдимдәре ҡыҙыҡлы. Тағы: большевиктар ер реформаһын эсерҙарҙан урланы...

— Уны Ленин иптәш яҙҙы!

— Вәлиулла, уны Ленин күсереп яҙҙы!

— Абзый... — Волревком ағзаһы күҙҙәрен шар асты... — Һин пролетарий юлбашсыһына тел тейҙерәһең!

— Вәлиулла, беҙ бәхәс ҡорабыҙ, беҙ — ирекле кешеләр! Социалистар әйтмешләй, һәр политик бәхәстә дәғүәсеһенә түҙемле булырға тейеш,

ә һин ҡыҙып-туҙып бараһың, тағы, һеҙ, большевиктар, бөтәгеҙ ҙә шундай яндырай! Һеҙгә ҡылыс тоттор ҙа атҡа атландыр.

— Абзый, һиҙәм, һин беҙгә ҡаршы! Һин большевиктарҙы күрә алмайһың!

— Юҡ, энем, мин бары уларҙың хас йөҙөн асам, эш алымдарын тәнҡитләйем.

— Һин — социалист-революционер?

— Юҡ, мин кадет та, эсер ҙа түгел!

— Ә ул саҡта һин кем? Большевик түгел — точно! Һин байҙар яҡлы, һин учитель башыңа уларҙың йырын йырлайһың! Һин эшсе крәҫтиәнгә ҡаршы!

— Юҡ! — Бәхтейәр ҡул иҙәне.

— Абзый, һин — ҡырҡҡойроҡ! Байҙар яғында — бай, ярлылар янында — ярлы, большевиктар араһында — большевик, ә контрреволюционерҙар станында улар көйөнә бейеүсе!

— Вәлиулла!

— Миңә һин шуны ғына әйт: һин кем яҡлы, кемдәр тирмәненә һыу ҡояһың, и баста!

— Ярлыҡ тағырға һеҙ, большевиктар, шәп! — Бәхтейәрҙең дә асыуы ҡабарҙы. — Мин байҙар ҡуштаны, мин ҡырҡҡойраҡ та икәнмен...

— Абзый, был һүҙҙең осо булмаç! — Вәлиулла урынынан һикереп торҙо. — Әйт, һин кемгә хеҙмәт итәһең? Минең бары бер туған абзыйымдың кемдәр яҡлы булыуын ғына белгем килә... Ул миңә дуҫмы, дошманмы?

— Туҡта әле, Вәлиулла, нишләп һинең һүҙең генә һүҙ, һинең туҡһаның ғына туҡһан? Большевик булдым тигәс тә, бөтә ер һеҙҙең тирәләй әйләнергә тейешме, һеҙ ер кендегеме? Ниңә һин миңә яраҡлашмайһың, ә мин һинең көйөңә баҫырға мәжбүрмен?

Ағай-энеләрҙең сираттағы был бәхәсе лә бер нимәгә килтермәне; бары оторо дошманлашып, бер-береһенә үсләшеп кенә айырылыштылар.

Бәхтейәр үҙе лә асығын ғына белмәй. Һаман күңелендәгеһен, йөрәгенең ҡайһылай бойороуын төшөнөп етмәй. Икеләнә. Донъя үтә боларған заман, тиҙ генә аңын-тоңон айырырлыҡ түгел. Ике аяҡлы ғына түгел, дүрт аяҡлы йән эйәһе лә һөрлөгөп бара. Ҡайҙа хаҡ, ҡайҙа яҙыҡ? Кем хаҡлы, кемдәрҙең партияһы халыҡ яғында? Кемдәр халыҡ өсөн, ә кемдәр уға ҡаршы көрәшә? Донъялағы хәл-әхүәлдәр буталсыҡ, сәйәси ваҡиғалар томаны эсендә тиҙ аҙашырға мөмкин... — өҙөп кенә әйтә, ҡәтғи генә бер ҡарарға килә алмай. Күңелдәге боларыштарҙы еңел генә хәл итһә, теге йә был яҡҡа йәһәт кенә сығып баҫһа ине лә...

Байғура әфәнделәр, большевик иптәштәр, уға һайлау хоҡуғы бирегеҙ! Кешенең, илдең, халыҡтың быға ғына хоҡуғы барҙыр бит?

Тағы учитель үҙен бурлыҡ өҫтөндә лә тотоп ҡуя. Ҡара, Вәлиулла энеһе — дружинниктар рәйесе уның тәртибен дөрөҫ әйтте: Бәхтейәр, ысынлап та, ваҡиғаларҙан ситтәрәк торорға, тормоштан арыраҡ булырға тырыша. Бәхәстәргә ҡатышмай. Хуш күңелле кеше. Ситтән генә күҙәтә, баррикадалар артына баҫмай. Ғәмһеҙ әҙәм. Вәлиулла әйтмешләй, әҙәм аҡтығы. Бер-береһен дөмбәҫләшеүселәрҙе күрмәй ҙә, белмәй ҙә.

Бәхтейәр учитель үҙе лә иҫкәрмәҫтән Ҡуянсыҡ урамына барып сыҡҡан. Ҡуянсыҡ урамында Сәүиәләр йәшәй. Аяҡтары үҙҙәренән-үҙҙәре шунда

тарткан! Әллә ғашиҡтар араһында күҙгә күренмәҫ берәй тылсымлы еп һуҙыламы? Кем һине, Бәхтейәр, бында алып килде?

Алыҫтан уҡ таныны унының яңғырауыҡлы тауышын.

— Юл бирегеҙ! Юл! — Сәүиә бала-саға ыңғайына сана шыуа. — Китегеҙ!

Ҡаштаҡтау битләүе гөжләй, һабантуймы ни! Бала-саға тауҙы һырыған, байрам! Гүйә бар ауыл халҡы — шунда!

— Бөтәгеҙҙе лә уҙҙырам! — Арала иң сая тауыш — уныҡы. Малай-шалай, ҡыҙ-ҡыrҡын араһында башлыҡ һымаҡ.

Тағы ҡысҡырыш...

— Юл! — Санаға йөҙтүбән ятҡан малай-шалай.

Тау түбән елә, ел дә ҡыуып етә алмай.

— О-о! — Оса ғына түбән табай!

Балалар — тирәләй.

— Сәүиә апа! Апа!

Балалар сәбәкәй итә.

— Апа!

Ҡыйғас ҡашлы сибәркәйҙең бит алмалары яна, күҙҙәре осҡон сәсә:

— Ха-ха! — Бөтә тау битләүе гөжләй. — Ха-ха!

— Ап-па!

— Сәүиә!

— Әйҙә, минең арттан, Бәхти!

— Әйҙә! — Бәхтейәр ҙә уйынға ҡатышып китә. — Сәүиә!

Улар тағы тау башына үрмәләне, арттан сыр-сыулашып бала-саға эйәрҙе.

— Әйҙә! — Сәүиә менән Бәхтейәр бер санаға ултырҙы. — Юл!

— Ха-ха-ха! — Мөғәллимдәр ҙә улар менән уйнарға сыҡҡан. Тау битендә эй күңелле, малайҙар! — Ха-ха!

Тауыштары тауҙы күтәреп бара, биттәренә ҡар саңы ҡойола, юл да юҡҡа сыға... ҡайҙа олағалар? Әллә ҡайҙа еләләр, йәһәннәмгә ҡолайҙар!

Балалар сыр-сыулашҡан бер арала мөғәллимдәр күҙ яҙҙыра. Икәүләп, етәкләшеп, әүен артына ҡаса.

— Уф, иҫәрҙәр беҙ!

— Шаҡайҙар*! Бала-саға менән сана шыуып йөрөйбөҙ! — тип көлә Бәхтейәр, кинәт кенә үҙенең дә сабыйға әйләнеүенә һөйөнә.

— Һин ул шаҡай! Ҡарт нәкәҫ — сана шыуа! — Сәүиә шат.

— Ә һин — үҙең! — Ише серәшеп бәхәсләшә. — Ҡыҙ башыңа!

— Мин ярай үҙ тауымда! Ә һин?..

— Мин һине тотам!

— Тот! — Ҡыҙ ҡаса, егет баҫтырып китә, ҡыҙ юрый тоттормай, егет юрый тотмай.

— Сәүиә!

— Бәхтейәр!

Улар хәлһерәп ҡарға йығыла, бер-береһенең ҡосағында тына. Һулыштары йышайған, тындары ҡурылған.

— Сәүиә, мин һине урлайым...

— Бәхтейәр, мин һинән ҡалмайым...

— Әйҙә, әтейеңдәргә!

— Яусы ебәр!

---

*Иҫәрҙәр.

— Ебәрәм, Сәүиә! — Бәхтейәр етдиләнә. — Инәйем менән һөйләштем.

— Ул ризамы?

— Риза.

— Ә минең әтейем...

— Зөфәр ағай...

— Уҡыу йылы бөткәнсе көтәйек — мин риза...

Улар бәхетле, ҡар өҫтөндә — йәннәт, донъялары онотолған.

Быуындар яҙылды, хәсрәттәр онотолдо, ирәйеп яттылар. Унан тағы торҙолар, сауҡалыҡ араһына ҡастылар. Етәкләшеп алдылар, әйлән-бәйлән өйөрөлдөләр.

— Бәхтейәр, һин ҡушылайыҡ тиһең дә ул, донъя тыныс түгел. — Сая ҡыҙ егеткә яҫҡынып ҡараны. — Һин кемдәр яҡлы? Ысын, байҙар яҡлыһыңмы?

— Белмәйем. — Бәхтейәр икеләнеүен йәшермәне. — Шулай ҙа, Сәүиә, беҙ, уҡымышлы кешеләр, ҡайҙа аҡ, ҡайҙа ҡара икәнен айырырға тейешбеҙ! Башыбыҙ бар — үҙ аҡылыбыҙ менән хәл итергә кәрәк!

— Хәҙер шундай заман... — Сәүиә тынманы. — Революция булды, революция дауам итә, һәр кем үҙенең ҡайһы яҡта икәнен асыҡларға тейеш. Мин дә был хаҡта күп уйландым, һин әйтмешләй, уҡымышлы булғас... Большевиктар, ярлы халыҡ, бына беҙ, Зөфәр балалары, бәхетле йәшәһен, тамағы ашҡа туйһын, ер йөҙөндә тигеҙлек тантана итһен тип, революция яһаны... Ә байҙар һаман шул көйө, ауылда бер ни ҙә үҙгәрмәне. Мәғәндә байы — бай, ярлыһы — ярлы. Тик беҙ — мөғәллимдәр, беҙ — аңлы кешеләр, беҙ үҙебеҙ халыҡтың күҙен асырға тейешбеҙ!

— Дөрөҫ.

— Шулай ҙа һин кем яҡлы, Бәхти!

— Белмәйем. — Бәхтейәр башын эйҙе. — Бер ҡараһаң, большевиктар хаҡлы кеүек, икенсе ҡараһаң, юҡ...

— Байҙар батрактың ҡанын эсә, ете ҡат тиреһен тунай, Бәхти...

— Уныһы шулай... — Бәхтейәр һаман бер урында ҡарҙы иҙгесләүен белде.

— Шулай булғас... Һиңә тағы нимә етмәй, Бәхти, нимә аңлашылмай?

— Әллә? Үҙем дә буталып бөттөм. — Бәхтейәр усына ҡар алып йомарланы. Бөгөн көн йылы, шуға кәйефе лә шәп ине. Сәүиәһе менән күрешеү донъяһын тағы ла яҡтыртыбыраҡ ебәрҙе. Ул тағы, ғәҙәтенсә, фәлсәфә һатырға тотондо, һөйөклөһөнән бер уйын да йәшермәне. Сәүиәнең үрһәләнеүенә лә, ҡыҙып-туҙып барыуына ла һис ижтиһад итмәне. — Беләһеңме, Сәүиә, мине большевиктарҙың тотҡан ерҙән һындырыуы аптырата. Халыҡ уларҙы ен кеүек күрә бит.

Сәүиә ауыҙын бөлшәйтте, егет быны һиҙмәне. Әллә һиҙһә лә, әһәмиәт бирмәне, һаман үҙенекен туҡыуын белде.

Ҡышҡы төн оҙон. Сәүиә өйҙә юғалтҡандарҙыр инде тип шөбһәләнде. Ул барыбер һорауҙарына яуап тапманы, Бәхтейәр һаман буталсыҡ хәбәрен сурытты. Шул хәбәрҙән ҡыҙҙың башы ҡатты, ҡолағы тондо. Һөйөнөшөп күрешһәләр ҙә, бойоғошоп айырылыштылар.

Бәхтейәр учитель тынысланманы, мейеһенә һөйөклөһөнөң “һин кем яҡлы” тигән өндәре уйылып ҡалды.

Бәхтейәр уйҙарының осона сыға алманы, ҡайһы тарафты һайларға ла белмәне. Ул — ике яр уртаһында, ике юл сатында.

...Йәш саҡта Ҡазанда уҡыны. Өйҙән ярҙам булмағанлыҡтан, уҡыуын ослай алманы. Мөғәллимлек эшенә тотондо.

Ҡасандыр Байназар ҡарттаһы* Мәғҙәнде усында бейеткән. Ҡара-ҡаршы терәтеп, йылы солан менән тоташтырып ике өй һалдырған бер үҙенә, һарай, арбаҙҙарын ғына түгел, ҡоймаларын да таштан бураған. Иҫәпһеҙ-хисапһыҙ малы ялан иңләп йөрөгән. Ололар һөйләүенсә, Мәғҙәндә беренсе бай булған, йылҡы өйөрө башы йылғаға етеп барғанда осо саҡ һарайынан сығып килә икән... Бай бисәһе Шәһәр ҡарсыҡ та эре, түш кирә. Халыҡ менән һис иҫәнләшмәй. Күрше-күлән үҙен Зәһәр ҡарсыҡ ҡына тип йөрөтә.

Шул Зәһәр-Шәһәр ҡарсыҡ маҡтана икән:

— Анау Биҙәртауы сүкһә сүгер, мәгәр минең байлығым шиңмәҫ!

Шул зәһәр ҡарсыҡтарҙан, хәтәр байҙарҙан хәҙер әкәмәт мәҙәк кенә ҡалған. Биҙәртау мәгәр һаман тора, сүкмәгән, ә зәһәр ҡарсыҡтар, хәтәр байҙар ҡайҙа ул? Байназар байҙың малын Муллабай улы туҙҙырып бөтөргән, уның улы Бәхтейәргә ҡорсаңғы тай ҙа ҡалмаған. Шуға Бәхтейәр Ҡазанда белемен бик ырата алмай, Пермь яҡтарына сығып китә, ләкин унан да тиҙ ҡаҡсыталар был кирегә бөткән затты, үҙ һүҙле, үгеҙ күҙле егетте. Килмешәк, арҡырыға бөткән!

Бәхтейәр тыуған ауылына ҡайтты, әсәһе ныҡ ҡартайғайны — шул да ҡойроғон борҙо. Йыл да ситкә сығып китергәме әллә тип ашҡына — күңеле әллә ҡайҙарға тарта, бер туған ҡустыһы Вәлиулла менән дә тынышмай. Уныһы империалистик һуғыштан офицер дәрәжәһендә ҡайтты ла, большевиктар сәйәсәтенә ҡушылды, волревкомға һайланылар. Фронтта большевиктар фирҡәһенә лә ингән икән... Бәхәстәре бөтмәй, ҡаңғырған әсәһе Миңдебикә тыйып ҡарай — оло балаларының алдарына сыға алмай. Тағы, Бәхтейәр ҙә донъя күргән кеше, Златоуст өйәҙ уҡытыусылар училищеһын тамамланы, ауылда абруйы ҙур, халыҡ үҙ итә, олоһо, кесеһе “учитель”, “мөғәллим” тип ололап тора. Динсе халыҡтың да ғилемгә, тәрбиәсегә ихтирамы ҙур ул Мәғҙәндә.

Бәхтейәр учитель һаман ҡайһы ҡабырғаһына ятырға белмәй. Ҡайһы тарафта күңеле, ҡайһы яҡтан балҡып ҡалҡыр бәхет ҡояшы? Төрлөсә юрай, төрлөсә самалап ҡарай — хәҡиҡәткә етә алмай, таба алмай нәғеҙ генә үҙ юлын.

Килешә. Сәүиә һөйөклөһө үҙ ыҙанын тапҡан, уның һуҡмағы билгеле, тап-таҡыр булып ялтырап ята. Суҡынғыр сибәркәй, йөрәгенә инеп ултырҙы ла йән тыныслыҡтарын алды, шул йөрәк итен телептелә. Бәхтейәрҙең башы миңрәүләнгән. Ул ғәзиз кешеһенән дә яҙғыһы килмәй, үҙенең күңелен дә баҫа алмай. Был болғансыҡ донъяла яҙа баҫыуың да тиҙ, был буталышта башыңды әрәм итеүең дә ихтимал... Аңлай мөғәллим үҙ хәлен... Ул ҡаңғырҙы, башын әллә ҡайҙа илтеп кенә олаҡтырғыһы килгән мәлдәре була. Тағы кисегә, нисәнсе ҡат теге хыялынан баш тарта; әсәһе еңенән тарта, Вәлиуллаһы елтерәтә, Сәүиәһе тота. Ул был донъяны ятратмай ҙа, унан айырыла ла, ҡотола ла алмай. Хәс тә ҡойроғо боҙға ҡуша туңған теге хәйләкәр төлкө хәлендә: хәл-әхүәлен аңлай, был донъянан ҡасыу кәрәклеген дә белә, ләкин теләгән ғәмәлгә ашыра алмай. Хыялы ҡанатлы, аҡылы алтын, ҡулы ҡыҫҡа.

---

*Олатаһы.

# II

Минтаһир бай мыҡты кәүҙәле ныҡ ҡарт әле. Ул, гүйә тупыс ағас умартаһы, ерҙән әҙ генә күтәрелгән дә үҫеүҙән туҡтаған. Буйға ла, киңлеккә лә бер сама. Муйыны юҡ, дәү башы киң ҡалын ҡулбаштарына батып уҡ киткән. Шундай ҙур баш ауылда бүтән берәүҙә лә юҡтыр. Тағы: был унның иң аҡыллы, иң башлы ил ағаларынан икәненә лә ишара. Ҡарт инде күп йылдар волоста старшина булып тора, кантондан, өйәҙҙән килгән һәр чиновник уға төшә, унның менән генә иҫәпләшә.

Ата-бабалары Ҡуянсыҡ урамында йәшәгән, ул да шунда оло-оло һарайҙар һалдырҙы, ҡоймаларын ауылдағы ғәҙәт буйынса таштан бураны. Ихатаһына себен дә осоп керерлек түгел.

Төп өй йәнәшенән өс ҡатынынан тыуған балаларының донъяһы теҙелгән. Был да байҙың көс-ҡеүәтен күрһәтеп тора бит. Ни тиһәң дә, ауылда унның һымаҡ өс ҡатынға эйә булыусылар бармаҡ менән генә һанарлыҡ.

Минтаһир бай Мәғҙәндә тәүләп жнейка алдырҙы, Мәхәммәткәримдән күреп молотилка ла ҡайтартты. Ул ваҡытта ҡоҙа ла булышмағайнылар әле. Ураҡ осоро етһә, балаларына ышанмай эште үҙе башлай: тәүҙә баҫыу тирәләй урап сыға, ашлыҡтың бешеүен тикшерә. Шунан батрактарҙы ҡыр буйлап уратып ҡуя. Өс ат егелгән урғыс менән урырға тотона. Аттары арығас, алмаштыра, үҙе талсыҡҡас, улына урынын бушата. Шулай һары таңдан ҡараңғы төшкәнсе уралар, ә батрактар арттан көлтә бәйләп өлгөрөргә тейеш. Ҡайһы берәүҙәр ҡояш аҫтында хәлдән тайып йығыла — бай барыбер эште туҡтатмай, аяҙ көндөң һәр сәғәте ҡәҙерле. Һабанда һайрашмаһаң, ырҙында ыңғырашырһың!

Бай шулай йәшәй, ауылдың бүтән хужаларына һис тә тартмаған. Бер Минтаһир бай хеҙмәтселәре менән бергә, улар араһында ҡатышып йөрөй: тирләп бесән саба, ең һыҙғанып ашлыҡ ура... Мөхәммәткәрим ҡоҙаһы көлгәнсә, ялсыларынан күберәк тә эшләйҙер әле ул Минтаһир старшина, ҡартайһа ла, берәүгә лә һыр бирмәй — властағы эшен дә ташларға уйы юҡ.

— Эшен эшләгән кеүек, бисәләрен дә шулай һөйә Минтаһир ҡоҙа, — тип көлә Мөхәммәткәрим хажи.

Хажи һәр ваҡыт байға һоҡланды, унның менән ишкә ҡуш булырға, ҡоҙалашырға атлыҡты... Көслө тоҡомға ҡушылғыһы, затлы затҡа иш булғыһы килде. Көслө тамырҙан көслө олон яралыр, көслө тамырҙар бергә ҡушылһа, мул уңыш бирер!

Мәғҙәндең данлы байҙары шулай туғанлашып ҡуйҙы, хажи оло ҡыҙын старшинаның улы Ғәптелғәнигә икенсе бисәлеккә бирҙе.

Байҙар байҙар менән ҡатыша, туғанлаша шул. Ауылда ла һәр кем үҙ тиңен ҡарай, үҙ ишенә ылыға. Алтынды алтын тарта, бай байҙы һайлай, ярлының тағы үҙ көнө.

Яңы власть сыҡҡас, байғураларҙың хисабы үҙгәрҙе, көнө-торошо боҙолдо. Иң тәүҙә Минтаһирҙы старшиналығынан төшөрҙөләр... Унһы менән генә бөтһә, ни ҡаза... Хоҙайға доға ҡылырҙар ҙа етем-еһергә хәйер таратып ҡотолорҙар ине, бигәйбә.

Ул көндө Мәғҙәндең иң эре байҙары Мөхәммәткәримде, улы Ғәптелғәни менән Минтаһир старшинаны, улы Шафиҡ менән Аллаһийәр байҙы, Сәйфетдин мулла менән Әхмәҙиә байҙы идараға саҡырттылар.

Волость ревкомы сәркәтибе күҙлекле Нәбиулла Сәхәүетдинов урынынан еңел генә ҡалҡты. Балалыҡтан да сыҡмаған зат, эшмәкәр, имеш. Бите лә шып-шыма, битендәге бәпкә йөндәре лә беленә... шул малай ҡуш йөрәкле икән, ҡурҡыуҙың ни икәнен белмәй, атаһы яғынан туған тейеш Минтаһир старшина ҡаршыһына баҫып һөйләшә:

— Минтаһир ағай, совет власы исеменән волревком ҡарары менән һиңә 100 мең һум күләмендә контрибуция һалына... Бына — ҡарар! — Егет ҡағыҙ битен кисәге старшина битенә төрттө.

Минтаһир байҙың йөҙө көл булды, ул айнып өлгөргәнсе күҙлекле егет ары тел шартлатты:

— Мөхәммәткәрим ағайға ла 100 мең һум контрибуция, Аллаһийәр ағайға — 70 мең һум, Шафиҡ ағайға — 30 мең һум, Ғәптелғәни ағайға — 20 мең һум, Сәйфетдин ағайға — 10 мең һум, Әхмәҙиә ағайға — 10 мең һум.

Шулай ҙа Минтаһир старшина тәүләп иҫен йыйҙы:

— Кем, Нәбиулла улым, яңылышмаһам, һин, ысынлап та, Ғәүнетдин энемдең малайы, шай?

— Дөрөҫ, бай ағай, мин — Ғәүнетдин батрак улы, хәҙер волревком сәркәтибе; совет власы исеменән волревком ҡарары менән һеҙгә контрибуция һалам! Беҙ юғарылағы кантон, өйәҙ, губерна ревкомдары ҡушыуы буйынса эш итәбеҙ...

— Ә мин һинең ул волревкомыңа ла, көпә-көндөҙ кеше талаусы власыңа ла төкөрәм! Контрибуцияңа ла төкөрәм, йөҙөңә лә төкөрәм! — Минтаһир Нәбиулланың битенә ласҡылдата ҡаҡырҙы.

— А-а!

Тауышҡа күрше бүлмәләрҙән комитетсылар йыйылып китте.

— Кафырҙар!

— Бушбоғаҙҙар!

— Әтрәғәләм заттары!

— Иблистәр!

Байҙар тауыш күтәрҙе.

— Кем? — Волком рәйесе менән волземком башлығы ла пистолет һелтәп килеп етте.

— Ниндәй тауыш! — Продкомиссия рәйесе Ҡотдосов та шунда.

— Тағы шул старшинамы? — тип аҡырҙы дружинник Абдрахман.

Байҙар тынмағас, партячейка рәйесе Ниғмәтйәнов түбәгә атты. Пуля юлынан иҙәнгә аҡбур киҫәге ҡойолдо.

— Мин һеҙҙең контрибуцияғыҙҙы түләмәйем! — тине Минтаһир, йәнә тәүләп телгә килеп.

— Минтаһир байҙы ҡулға алырға! — тип ярһып ҡысҡырҙы волком рәйесе Ҡылысбаев.

— Мин дә баш тартам!

— Мөхәммәткәрим хажиҙы лаябырға! — Ҡылысбаев тағы тамағы ҡарлыҡҡансы аҡырҙы.

Ғәптелғәни бай менән Аллаһийәр бай ҙа волком ҡарарына буйһонманы. Улар шундуҡ һаҡ аҫтына алынды. Әхмәҙиә бай менән Сәйфетдин мулла, Шафиҡ бай 24 сәғәт эсендә контрибуцияны түләү шарты менән өйҙәренә ҡайтарылды.

Минтаһир старшина һатыусы Коля Пришибеевтың таш лавкаһы баҙында ете көн ултырҙы, ете көн буйы ыҡҡа килмәне. Бүтәндәр

ыңғайына уны ла әпәй менән һыуҙа тоттолар, бүтәндәр ыңғайына уны ла көнөнә ике-өс ҡат һорауға саҡырҙылар — ҡарт күнмәне.

Етенсе көн тигәндә Мөхәммәткәрим комитетсыларҙы үҙе саҡырҙы: ишеккә шаҡылдатты. Хәйлә ине был, тыштан ризалашһа ла, Мәғҙәндең беренсе байы эсенән ант итте: был контрибуция советтарҙың тамағына торор, хажи быны былай ғына ҡалдырмаҫ, көнө бөгөн түгел, мәле бер тыуыр — ул большевиктарҙан шул контрибуцияны ҡан ҡоҫторор... Әлегәсә хажи һүҙен ергә һалғаны юҡ, бер антын да бушҡа әйткәне юҡ.

Минтаһир старшина һигеҙенсе көнөндә лә ыңғайламаны, ахырҙа бай менән саялашып ахаллаға төшкән, аяҡтан йығылған комитетсылар хәйләгә барҙы. Шулай, алтынсы көнөндә улар, үҙҙәре әйтмешләй, көмрө ҡолға Аллаһийәрҙең ауыҙын ҡайырғайны...

— Аллаһийәрҙең дә көмрөһөн турайттыҡ! — тип көлөштө комитетсылар.

— Ә хәшәрәттең хәшәрәте, ҡанһыҙҙың ҡанһыҙы Мөхәммәткәрим хажи үҙе баш һалды, ха-ха! — Дружина башлығы Вәлиулла тағы усын ыуҙы.

— Минтаһир старшинаһы иң әшәке, иң ҡаты башлы булып сыҡты — шәп булғас, энекәштәр, шуны тунап ҡарағыҙ! — тип, утҡа май һипте Абдрахман.

— Хәтерегеҙҙәме, егеттәр, беҙ Аллаһийәр байҙың һандығын нисек асҡайныҡ? — Ревтрибунал рәйесе Ғайнанов та, ниһайәт, һүҙгә ҡушылды.

— Вәт, баш үҙеңдә, Зөфәр ағай! — Абдрахман урынынан һикереп төштө.

Комитетсылар шундуҡ эшкә тотондо.

Улар Аллаһийәрҙе лә шулай тәүҙә өйөнә ҡайтарып ебәргән кеше булғайнылар. Йәнәһе, бар, ҡарт, юлыңда бул, бүтән беҙгә осрама! Быныһы һуңғыһы булһын, әйҙә, бер тиклемгә был контрибуция тураһында онотоп торайыҡ, ти.

Минтаһир ҡарт башын елкәһенә тағы ла нығыраҡ йәшереп өйөнә һыпыртты. Ҡайтып, сәй эсеп тә өлгөрмәне, артынан тағы ревтрибуналсылар килеп баҫты.

— Ә, старшина ағай, беҙ артыңдан...

Ҡарт телһеҙ ҡалды.

— Әгәр ҙә мәгәр контрибуцияңды түләмәһәң, өйөңдө тентейбеҙ!

Ҡарт һаман өндәшмәне, күҙҙәрен сипылдатып тик ултырҙы.

— Егеттәр, башлағыҙ! — тип әмер һуҡты ревтрибунал башлығы.

Комитетсылар төп йорттоң аҫтын-өҫкә килтереп ташланы, әлегә бер нимә лә тапманы. Аллаһийәр бай шунда шыр ебәргәйне, өйөнөң болаға әйләнеүенә күҙҙәре әйләнеп китте лә ҡулдары үҙҙәре үк аҡса муҡсайына төрттө, ә бының һыны ҡатҡан.

— Ярар, — тине ревтрибунал рәйесе Ғайнанов, тешен ҡыҫып. Шунан наганын кобураһынан һурып сығарҙы ла өҫтәлгә һалды. — Ҡарт, һиңә бер сәғәт ваҡыт: йә йөҙ мең һум табаһың, йә башыңдан яҙаһың — һайла!

Комитетсылар ҙа шымып ҡалды, өй эсендә үле тынлыҡ урынлашты. Ревтрибунал күҙен наганынан алмай, тағы күҙ ҡырыйы менән генә аңдый.

Шунда тағы бәлә: ҡарт иҫенән яҙып ҡоланы. Хәс тә дәү түшле, эсе ҡыуыш тирәк. Бисәләре сыр-сыулашып йүгереште, күршеләге Ғәптелғәни йыртҡыстай үкереп килеп инде. Комитетсыларҙан Абдрахман бер биҙрә һалҡын һыу ҡойҙо ҡарт өҫтөнә — теге шундуҡ күҙен асты, баш

осонда ҡатҡан улына көсәнеп ниҙер бышылданы. Тегеһе, йәһәт ҡалҡынып, тышҡа ташланды.

Ә комитетсылар һаман урындарынан ҡымшанманы, ас ҡоҙғондар һымаҡ, ҡорбандың тамам ҡаҡшауын түҙемле рәүештә көттөләр, буғай.

III

Мәғҙәндә байҙың да байы, уҫалдың да уҫалы, әлбиттә, Мөхәммәткәрим хажи. Хажи исемен йөрөтһә лә, аяуһыҙҙың аяуһыҙы. Бағаналай дәү, ҡалын һынлы. Күҙҙәрендә үс, ҡарғыш оялаған, текә маңлайы, ҡуйы ҡаштары тағы үҙенә олпатлыҡ өҫтәй, бөтә булмышына дәһшәт бирә төҫлө.

Оло урамға сыҡһа, урамда кеше ҡалмаған, ҡайһы ҡайҙа боҫоп бөткән. Күрше-күлән дә хажи күҙенә салынмаҫҡа тырыша — теге барыбер бер ҡыйышын табыр, бер этлеген уйлап сығарыр. Наганы ла бар, тип һөйләйҙәр.

Һәр хәлдә, байҙың хәмер эскәнен күргән кеше юҡ Мәғҙәндә — хәбәрҙе өйәләр. Мөхәммәткәрим хажи приказчиктары, хеҙмәтселәре менән ашлыҡ сауҙаһы менән мәшғүл: хажи үҙе лә йә кантондан, йә өйәҙҙән ҡайтып кермәй, Златоуста, Силәбелә, Красноуфимда йөрөп, ҙур фирмалар менән килешеүҙәр төҙөй, волостарҙан һатып алғанын иген ҡабул итеү пункттарына, йылға пристандәренә ташый, Әйҙән Ҡариҙелгә, Ағиҙелгә, шунан Кама, Волга яғына оҙата байлығын. Шулай ашлыҡ һатып теше сыҡҡан, яҡын-тирәлә лә, алыҫыраҡ тарафтарҙа ла был өлкәлә уға еткергән кеше юҡтыр... Һуңғы ваҡытта был шөғөлгә Ғәптелғәни кейәүен йәлеп итте, үҙенең малайҙары юҡ, бисәләре ҡыҙ таба ла ҡыҙ таба, ә кәсепте өҙмәҫкә, балаларҙы ла шуға күндереп ҡалырға кәрәк. Ана, Сахай приказчигы үтеп сыҡҡан бәндә, алдыңды-артыңды аңдымайыраҡ торһаң, бай ағайыңды ла төп башына ултыртыр.

Тәҙрәләре урам яғына сыҡмаған төпкө бүлмәһендә ҡағыҙҙарына сумып ултырырға ярата хажи. Камзулы тышынан шәһәрҙән алып ҡайтҡан йәшел атлас халатын кейә, аяғына оло быймаһын эләктерә.

Бөгөн дә төшкәсә документтарҙы аҡтарҙы, ғәҙәт итеп алғанса, көнөн көнөнә иҫәп-хисап сығарып барырға тырыша. Ҡалған эшкә ҡар яуа. Иҫәбең дөрөҫ икән, күңелең дә тыныс, зиһенең асыҡ, ары ни ҡылырға икәне күренеп тора.

Ғәҙәтенсә, Санкт-Петербургта хәрби-инженерлыҡ училищеһында уҡыған китаптарын аҡтарырға ярата: улар кәштәнең иң түренә ҡуйылған, һәр ваҡыт ҡул осонда ғыналар. Күп файҙаһы тейҙе хажиға уларҙың. Нисек кенә тимә, хәрби кеше булып китмәһә лә, Рәсәй баш ҡалаһында алған белеме кәсеп-шөғөлөнә яраны, уның шул замандарҙан ҡалған бәйләнештәре, дуҫ-иштәре сауҙа эшенә һуңынан ныҡ ярҙам итте. Әлбиттә, хажи Санкт-Петербург менән генә сикләнеп, был белеме менән генә ҡәнәғәт булып ҡалманы, Ҡаһирәне лә, Бағдадты ла күрҙе, Истанбулда биш йыл ятып сауҙа мәктәбендә уҡыны, шунда ныҡлап алыш-бирешкә өйрәнде. Яҡташтары, хөрмәтләп, уны хажи тип йөрөттө. Мәккәлә лә, Мәҙинәлә лә булды Мөхәммәткәрим, барыһын да күрҙе, йолаһын да үтәне, хаҡ мосолман икәнен бер ваҡытта ла онотманы. Йола ғәмәлдәрен бойомға ашырып, шулай тәртип-низамдарҙан тайпылмай йәшәне. Шулай ҙа сит илдәрҙә ул бәғзеләр кеүек хаж ҡылып, дини фәнде эстәп кенә йөрөмәне, ә иҡтисадты, хоҡуҡты, сауҙа-хисап эшен ныҡлап өйрәнде, сәйәсәтте лә ситләтеп

үтмәне. О, унан башҡа был донъяла йәшәп буламы? Бигерәк тә аҙ һанлыға ҡалған, Рәсәйҙә иҙелгән милләт вәкиле булараҡ, ул был милли мәсьәләләрҙән айырыла, дөйөм был сәйәсәттән ситтә ҡала — шул мәшәҡәттәрҙән, күңел ярһыуҙарынан һис тә ҡотола алмай ине. Ул бер ваҡытта ла үҙенең башҡорт булыуын онотманы, йөрәгендәге шул утты, әрнеүҙе һис һүндермәне. Шулай ҙа оло урыҫ илендә һәр саҡ үҙ ҡараштарын, күңелендәгеһен төпкә йәшерергә күнекте, урыҫ кешеләренә һис йәнен асманы, асылып бөтмәне, киреһенсә, уларға гел үҙенең Санкт-Петербургта уҡыуын, шунда тәрбиә алыуын тылҡыр булды (был бер ауырыуына әйләнде, теленә сиҡан сығарҙы), ә сит илдәрҙә, бигерәк тә Көнсығышта йөрөүе хаҡында ләм-мим ауыҙ асманы. Урыҫ хакимиәте вәкилдәре уны үҙебеҙҙең кеше тип һананы, уға тулыһынса ышанды, гәрсә бигүк дөрөҫкә тап килмәһә лә...

Хәйер, теге ваҡытта килешкәнсә, волостың хәллеләре советтарға иҡтисади бойкот иғлан итте: бар ерҙән хажи кешеләре осһоҙ ғына хаҡҡа иген һатып ала; Мәсәғүт, Ҡыйғы, Дыуан, өйәҙ ҡалалары баҙары уның приказчиктары менән тулған... Йыйылғанды бай тура йылға пристандәренә төшөрә бара, шундағы пункттарға ҡиммәт хаҡҡа һата. Красноуфим, Мәтәле пристаненә лә оҙата ашлыҡты — хажи ул әмәлен белә. Бары быйндағы ревкомдарға эләкмәһен ашлыҡ!

Хеҙмәтсеһе Хәйҙәр волкомдан йомошсо килеүен еткерҙе.

Сырайын һытты Мөхәммәткәрим, тартылды-һуҙылды.

— Үҙең генә һөйләш шул хәстрүштәр менән!

— Ағай, һине күрергә теләйҙәр...

— Ниндәй йомош?

— Белмәйем.

— Һораш!

Мөхәммәткәримдең үҙен волкомға саҡырталар икән.

Хажи сығырынан-сыҡты.

— Тот та саҡырт, тот та, малай-шалай күреп, фарман һуҡ, имеш... Шәп эшләй волком, ауыҙҙарына төкөрәйем.

Мөхәммәткәрим хажи өс-дүрт ҡат саҡыртып та барманы ул волость идараһына.

Волость идараһы ул көндө ауыл сходы үткәреү менән мәж килде, шуға хажиҙы оноттолар, буғай. Сходҡа саҡырыу һәр өйгә тиерлек ебәрелгәйне, байҙарға айырым-айырым йомошсолар бүленде. Мәсьәлә үтә лә ҡырҡыу: өйәҙ, кантон ревкомдары ашлыҡ оҙатыуҙы тиҙләтеүҙе талап итә, волревкомдың да бөтә көсө бөгөн ошо фронтҡа ташланды.

Волком рәйесе Ғибат Ҡылысбаев һүҙен ҡыҫҡа тотто:

— Волревком ағзалары, ауылдаштар, волость йәмәғәте, революция ҡурҡыныс аҫтында, илдә һаман сыуалыштар баҫылмай. Әле Кронштадта, әле Тамбовта фетнә күтәрәләр, немес көньяҡ-көнбайыш фронтта тағы һөжүмгә күсте, революция бишеге Питерҙа һәм яңы баш ҡалабыҙ Мәскәүҙә халыҡ асыға, эшселәр станок артында әлһерәп йығыла — донъя империализмы социализмды быуып ташларға яҫҡына. Шул ауыр мәлдә эшсе дуҫтар беҙгә, крәҫтиәндәргә, мөрәжәғәт итә! Ауылдаштар, беҙ эшсе синыфына ярҙам итергә тейешбеҙ!

Үҙегеҙ ҙә күреп тораһығыҙ, хәл ҡатмарлы, беҙгә кантондан тағы аҙыҡ-түлек бүлеге вәкилен ебәргәндәр. Хәҙер һүҙҙе уға бирәйек.

Күн тужуркалы комиссар алға сыҡты.

— Йәмәғәт, Мәғҙән волосы граждандары, иң тәүҙә миңә Мәскәүҙән Өфө губревкомына килгән телеграмманы уҡып ишеттерергә рөхсәт итегеҙ. Уға Халыҡ Комиссарҙары Советы рәйесе Ленин менән халыҡ комиссары Цюрупа ҡул ҡуйған.

“Дөйөм алғанда, Өфө губернаһында быйылғы уңыш юғарыраҡ булһа ла, Үҙәктә асығыусылар кәмемәй, Мәскәү, Петроград эшселәре аслыҡтан яфа сигә, аҙыҡ-түлек кризисы армияны ла тотҡарлай, хәрби операциялар үткәрергә ҡамасаулай. Шул уҡ ваҡытта урындарҙа аҙыҡ-түлек йыйыу тейешле ойошҡанлыҡ менән бармай. Ауылдарҙа, волостарҙа, өйҙәрҙә моменттың әһәмиәтен аңлатығыҙ, телдән һәм матбуғат аша агитация йәйелдерегеҙ, игенгә, мал-тыуарға, бәрәңгегә развёрстканы һүҙҙә түгел, ә эштә үткәрегеҙ... Аҙыҡ-түлекте Үҙәккә оҙатыуҙы ашыҡтырығыҙ, оҙатылған һәр бот иген тураһында аҙыҡ-түлек комиссариатына хәбәр итегеҙ”.

Йәмәғәт, волость граждандары, үҙебеҙҙең эшсе синыфҡа ярҙамға ашығырға, революцияны бар көсөбөҙ менән яҡларға саҡырам!

Волпродкомиссия рәйесе Ҡотдосов урынынан ҡалҡынды.

— Иптәштәр, волость граждандарының сходка саҡырылған вәкилдәре, беҙҙең комиссия һәр утыҙ ике ауыл буйынса исемлек төҙөнө. Унда һәр хужалыҡҡа айырым тейешле норма бүленгән; тиҙ арала граждандар шул нормаларын әҙерләү пунктына тапшырырға тейеш. Сүлейә станцияһына иген ылауы ойоштороу ҙа беҙгә йөкмәтелгән...

— Волость дружинаһы башлығы Байназаровҡа ылауҙы һаҡлау, оҙатыу йөкмәтелә... — тип белдерҙе волком рәйесе Ҡылысбаев. — Ә ревтрибунал иген әҙерләүселәргә саботаж яһаусылар менән көрәшәсәк. Ғайнанов иптәш, волревком һеҙҙән оперативлыҡ талап итә! Ҡотдосов иптәш, ауылдарға бөгөн үк исемлектәрҙе еткерегеҙ, иртәгәнән үк өй беренсә йөрөп ашлыҡ әҙерләүҙе йәһәтләгеҙ!

Фекер алышыу булманы тиерлек, ризаһыҙ кешеләргә һүҙ ҙә биреп торманылар, сулаҡ Ҡылысбаев дилбегәне ҡыҫҡа тотто.

— Йәмәғәт, волостан йыйылған вәкилдәр, волревком ағзалары, мәсьәлә аңлашылды, исемлек бар, план әҙер — эшкә тотоноғоҙ!

Икенсе көндө үк комиссия ағзалары, волкомсылар ауылдарға таралышты, өй беренсә төштөләр; ҙур байҙарға, ҡаршылыҡ булырын самалап, дружинниктар ҙа беркетелде.

Ҡотдосов комиссияһы бер өйҙө лә урап үтмәне, уның теге исемлегенән бер хужалыҡ та ситтә ҡалманы. Әпшәндә эш айырыуса уң барҙы. Комиссия рәйесе башта сельсовет башлығын өгөтләп маташҡайны.

— Әйҙә, боҙ киткәнсе планды үтәргә кәрәк, ташҡында, йылға ярынан ташып, юл өҙөлһә, һуң булыр...

— Аңлашыла, Ҡотдосов ағай, — тип көлдө Әпшән большевигы. — Мин бында власты ҡаты тотам, береһенә лә мах бирмәйем — план үтәлер...

— Рәхмәт, туған, — тип һөйөнөсөн белдерҙе волком кешеһе. — Ә батрактар, йәғни өйһөҙ, хужалыҡһыҙ кешеләр, һеҙҙә күпме?

— Бар улар... Ундан ашыу булыр...

Әпшәндә халыҡ етешерәк йәшәй, продразверстка планы еңелерәк үтәлә төҫлө тойолдо волость кешеһенә.

Ауыл осондағы өйгә инделәр.

— Жалай ағай, һин ярлы-ябаға исемлегенә индерелгәнһең, дәүләт һалымынан азат ителгәнһең, тик хужалығың бар, ашлыҡ сәсәһең, —

тип һөйләп алып китте сельсовет рәйесе. — Шуға волревком ҡарары менән үткән йылғы уңыштан дәүләткә утыҙ биш бот ашлыҡ тапшырырға бурыслыһың!

Сельсовет түрәһе волком вәкиле алдында шәп булып күренергә атлыҡты.

— Һай, кем энем, ҡайҙан алайым ул утыҙ биш ботто, йәмғеһе дүрт балама илле-алтмыш бот һуғып алдым, уныһы ла...

— Жалай ағай, әүенеңдә, кәбәндә көйө ултырғаны ла бар, шай...

— Һин мине тереләй һуяһың түгелме? Ярлы-ябаға, тиһең... Советтар ярлы-ябағаны шулай талаймы?

— Жалай ағай, волревком ҡарары был; хәҙер ашығыс комиссия төҙөгән ҡаты исемлек буйынса волоста продразверстка бара... Бына ҡаршыңда — шул комиссияның башлығы Ҡотдосов!

— Волость, комиссия... Ниңә улар айҙан төшкәнме, совет власы минең хәлемде белмәйме? Ауыҙымды асһам, үпкәм күренә... Һуңғы ҡабымымды тартып алырға килгәнһегеҙ ҙә! — Жалай ҡарт күҙ йәшенә ирек ҡуйҙы, волость комиссары өндәшмәне.

— Жалай ағай, баста, һуңғы ҡат әйтәм...

— Нимә? — Ҡарт аҡсай-тоҡсай ҡаранды.

— Егеттәр, тентегеҙ!

Әпшән ауылында продотряд эшкә тотондо, Жалай ҡарт, баласағаһы менән ер тырнап илап, большевиктарға күктән ҡарғыш яуҙырып ҡалды.

Әпшәндә эш осланды, Ҡотдосов ҡәнәғәт ине. Байҙар, урта хәллеләр, ярлы хужалыҡтар — барыһы ла комиссияға иген тапшырҙы, ҡайһылар нормаһын малы менән тултырҙы, батрактарға ғына тейމәнеләр. Уларының өйө лә, үҙ хужалығы ла юҡ. Улар күберәк туғандарында, хәллерәк затташтарында йәшәй.

...Мәғҙәндә продразверстка был юлы ҙур байҙарҙан башланды, сөнки улар аңын-тоңон белгәнсе, байлыҡтарын бура төбөнә йәшергәнсе, йә ситкә оҙатып бөткәнсе өлгөрөргә кәрәк ине.

Ҡылысбаев менән Ҡотдосов Мөхәммәткәрим өйөнә икәүләп китте. Хажи уларҙың тамағына таш булып торҙо шул. Уның эше буйынса уҙған аҙнала ғына канткомда һүҙ булды. Кантком башлығына инделәр.

— Кантком иптәш, Мөхәммәткәрим хажи беҙҙең волость кимәлендәге генә бай түгел... — тип башланы Ҡылысбаев.

— Ә, Мөхәммәткәрим хажи! Беләм...

— Беләһегеҙ: хажи өйәҙ, хатта губерна кимәлендәге бай... Ул Златоуст, Силәбе, Һамар менән генә эш итә, ашлығын ылаулап оҙата...

— Арестовать итегеҙ! — Кантком шәбәйҙе.

— Мандат юҡ!

— Хәҙер яҙып бирәм!

Ҡылысбаев көлмәне, шулай ҙа хажиҙы мандат менән генә өркөтөүҙең көлкө икәнен ул аңламағанына аптыраны.

— Кантком иптәш, мандатты алырбыҙ, әммә кантон да, өйәҙ ҙә үҙ яғынан аныҡыраҡ саралар күрһен ине: пристандәрҙә, станцияларҙа байҙарҙың ылауын ҡабул итмәһендәр!

— Беҙ был эш менән шөғөлләнәбеҙ, тик беҙҙең дә ҡул ҡыҫҡа — пристандәргә, станцияларға өйәҙ, губерна хужа; бындағы байҙарҙы күҙ уңында тоторға тырышабыҙ. Һәр баҙарҙа бөгөн ашлыҡ хөкүмәт ҡуйған ҡаты хаҡ менән генә һатыла, тип ышандыра алам.

— Хажи барыбер юлын таба, ҡайҙа ла — уның приказчиктары, ул шулар аша эш итә. Улары бер Мәғҙәндә генә ятмай, һәр ауылда ашлыҡ жыя, һәр баҙарҙа темекһенә... Станцияларҙа ла уның кешеләре оялаған...

— Хөкүмәт станцияларҙы, пристандәрҙе хәҙер үҙ өҫтөнә алды, саботаж менән аяуһыҙ көрәш бара, ә беҙ үҙ яғыбыҙҙан, үҙ биләмәләребеҙҙә хужа булайыҡ. Хажиҙың бер генә ылауы ла Сүлейәгә, Кропачауға үтмәһен, бөтәһен дә конфисковать итегеҙ! Бар, отделдан мандат алығыҙ ҙа — үҙ волосығыҙға! Беҙ бында ситуацияны өйрәнәбеҙ, һеҙ урындарҙа байҙарҙан күҙ яҙлыҡтырмағыҙ!

— Кантком иптәш, тағы бер мәсьәлә... — Һүҙгә волостың продкомиссары Ҡотдосов ҡушылды.

— Нимә?

— Беҙ байҙарҙың ашлығын алабыҙ, урта хәллеләрҙән дә жыябыҙ, бына ярлы хужалыҡтар ҙа был оператив исемлеккә индерелгән... Был, дөрөҫөн әйткәндә, уларҙы талау! Ярлы хужалыҡтарҙың кантондан яңыраҡ төшөрөлгән разверстка нормаларын үтәрлек хәле юҡ — ауыҙҙарынан тартып алабыҙ... Орлоҡтарына ла тейергә тура килә... Был да крәҫтиәнде советтарға ҡаршы аяҡландыра, беҙҙең бөтә пропаганданы юҡҡа сығара...

— Беҙҙең бүтән мөмкинлегебеҙ юҡ, комиссар иптәш... Ашлыҡты байынан да, ярлыһынан да жыйырға мәжбүрбеҙ, ҡалалар асыға, революция яҙмышы, аңлағыҙ, ҡыл өҫтөндә!

Ары телләшеп, бәхәсләшеп тороуҙың фәтүәһе юҡ ине. Ҡылысбаев менән Ҡотдосов канткомға "әгәр матростар, эшселәр кеүек, ауылда ла халыҡ баш күтәрһә, саботаж иғлан итһә, беҙ нишләрбеҙ" тип һорау бирә алыр ине, әммә тегеһе уларҙы йәһәтерәк волосҡа оҙатыу яғын ҡараны.

## IV

Ысынлап та, әлегәсә Мөхәммәткәрим приказчиктары йылдам эш итә. Сауҙа даръяһында һыуҙағы балыҡ ише йөҙәләр, хатта Ғәптелғәни ҙә арыу уҡ шымарып алды. "Ҡайның йөрөткәндә йөрөп, ул өйрәткәндә өйрәнеп ҡал", — тип тылҡыны Минтаһир бай ҙа улына.

Ғәптелғәни йыбанманы, атаһы толобона бөркәнде лә көн-төн тимәй йә Красноуфим, йә Сүлейә сапты. Большевиктарҙың продотрядтары көндөҙ юл төшһә, уларҙыҡылар төнөн йөрөнө, буранына ла, һыуығына ла ҡараманы, волость отрядтары менән хажи ылауҙары йәнәш тиерлек станцияға ашлыҡ ташыны. Һәр ерҙә — үҙ кешеләре, уларға саҡ ҡына йомдорһаң, ылауыңды алданыраҡ үткәрәләр, большевиктарҙыҡы көтөп тора. Пристань пунктында ла, Мәтәлелә лә, Кропачауҙа ла элекке таныш-белештәре етерлек, хажи улар менән әллә нисә бот тоҙ ашаған бит. Комиссарҙар һәр пунктҡа һаҡ ҡуйһа ла, баҙарҙарҙа инспекторҙары дежурҙа булһа ла, яйы табыла. Баҙар үҙе дарья менән тиң бит ул, ә хажи приказчиктары шундағы балыҡ шикелле...

Ғәптелғәни һуңғы ылауҙан бик йонсоп ҡайтты. Һаҡал-битен бәҫ һырыған, оҙон юлдан быуындары ҡатҡан, атаһының оло толобо ла турпышалай иңгә баҫа.

Бай оло бисәһенә тунын елпене лә "ағ!" тип тамағын ғырылдатты.

— Хәмер бирәм...

— Әтейем өйҙәме?

Өй эсенә тағы һалҡын боҫ тулды.

— Улым...

— Насый бураны башланған, ахырыһы.

Тынып ултырҙылар.

— Әтей, советтар донъяны ян-яҡтан ҡыҫымға алмаҡсы, ирекле сауҙаға ла сик ҡуймаҡсылар. — Атаһы өндәшмәгәс, дауам итте: — Бынан кире ҡайным йомошо менән йөрөмәйем, һәр юл сатына һаҡ ҡуйып бөткәндәр, ылауҙарҙы ныҡ тикшерәләр. Кемдән дә советтар биргән ҡағыҙ һорайҙар... — Ғәптелғәни битен һыпырҙы. — Беҙгә көн бөттө, хажи сауҙаһына ла — хуш. Беҙҙе Сүлейәлә эләктерҙеләр, станция келәттәренә етмәҫ борон... Бар ашлыкты хөкүмәт хаҡтары менән бушаттырҙылар!

— Мәлғүндәр! — Ҡарт әсе һүгенде. — Ирекле сауҙаһыҙ ниндәй донъя була икән? Шәһәр менән ауыл шулай ғүмер баҡый алыш-биреш итешеп йәшәгән дә...

— Хәҙер үҙҙәренең кооперация тигән нәмәләрен уйлап сығарҙылар, әтей, бөтә малды, ашлыҡты, баҙарға керетмәй, түбән хаҡ менән һыпырып аласаҡтар!

— Бушҡа, тиң!

— Әтей, шулай ҙа советтар шытып китер, өҫкә сығыр микән? — Ғәптелғәни күҙҙәрен мөлдөрәтте, атаһы һүҙ әйтәм, тип ауыҙын ғына асҡайны, ишек алдында ҡар шығырҙаны.

Өй эсе тулды ла ҡуйҙы.

— Ә, үҙебеҙҙең ҡоҙа лаһа! — Минтаһир ҡарт ныҡ ҡыуанды.

— Кейәүҙе алыҫ юлдан күрәйем тип... — Хажи устарына тынын өрҙө.

— Ҡайным, большевиктар бысаҡһыҙ һуя...

— Аңлатып һөйлә!

Ғәптелғәни хәбәрен ҡабатланы.

— Мәсәғүтте көрт ярып булһа ла урап үттек, Ҡыйғыны ла... Әйлиндә тикшерҙеләр, юл сатына баҫҡандар... Ике дружинасыһына берәр тоҡ һөйәнек, уларҙан ҡотолғайныҡ, Сүлейәләгеләргә эләктек!

— Хәстрүштәр!

— Хәҙер көнө-төнө дежур торалар...

— Муйынға боғалаҡ һалдылар ҙа!

— Ҡайным, был хәл оҙаҡҡа барыр микән? Советтарҙың власы йәшәп китерме?

Хажи өндәшмәне. Үҙ ҡайғыһы ҡайғы ине. Элекке старшина ла ауыҙына һыу уртлағандай ултырҙы.

— Хәстрүштәр! — тип тәкрарланы тағы хажи.

Минтаһирҙың һаман тыны сыҡманы.

— Ни ҡылып ҡарайбыҙ, ҡоҙа? — тине тағы хажи.

— Был большевиктар беҙҙе бөтәүләй һоғонмаҡсы, ҡоҙа, теге эште ҡыҙыулатырға ине...

— Мин дә шул хаҡта баш ватам...

— Һин, хажи ҡоҙа, мәғлүмәтле инсан, сит-ят яҡта ла күп йөрөйһөң, высокоблагородиелар, ундағы купецтар, офицерҙар ни уйлай?

— Улар ҙа беҙҙең һымаҡ кемделер көтә, — тине хажи, йәне көйөп. — Кемдер уларға тәрилкәгә һалып килтереп тотторорға тейеш!

— Хажи ҡоҙа, ә беҙ ни эшләй алабыҙ? Мәрҙәндә генә ятып, донъяны үҙгәртеп, иҫке тормошто яңынан ипкә һалып булмай ҙа...

— Уныһы ла хаҡ, ҡоҙа. Шулай ҙа уйлашырға, бер яйын табырға кәрәк. — Мөхәммәткәрим мәғлүмәтлеген, гәзит уҡыуын күрһәтергә теләне: — Большевиктарҙың да хәле хөрт, эйе, эйе, ул тиклем, кейәү туҡығанса, ал да гөл түгел: юл сатына һаҡсылар ҡуйып ҡына, бөтә иҡтисадты яйға һалып, ас Рәсәйҙе туйҙырып булмаясаҡ! Питер асыға, Мәскәүҙә лә — аслыҡ, моряктары, Дондағы, Себерҙәге казактары бола күтәрә, немес бына-быной үҙәк губерналарҙы баҫып алыр... Беҙҙә Ырымбур Дутов ҡулында, Өфө, Силәбе, Һамар... Яняҡтан бай капиталистик илдәр менән уратылған Рәсәй; большевиктар илде бар донъяға ҡаршы ҡуйҙы. Ҡара, наҙан халҡы менән генә йырып сыға алмаҫтар был мәхшәрҙе... Элекке белгестәр, хеҙмәткәрҙәр эштән баш тарта, көньяҡта — Краснов, көнбайышта Юдинич ғәскәрҙәре әҙер тора, ағай-эне, беҙҙең көн бөтмәгән әле, беҙ әле саҡ ҡына баш ҡалҡытып киләбеҙ. Америка менән Япондан, инглиздәрҙән дә ярҙам көтәбеҙ.

Ҡоҙаның оҙон телмәренән күҙҙәре асылып ҡалды, кәйефтәре күтәрелде; алға боҫрап торған аш та килеп ҡунаҡлағас, донъялар тағы йәнләнеп китте.

— Тир ҙә сыҡты. — Минтаһирҙың йөҙө асылды.

— Йәшәгеләр килеп китте... — Ғәптелғәни ҙә туғарылды.

Хажи ҙа эстән һөйөнә ине, ҡоҙаларына, оло ҡыҙы янына тәртә бороп, дөрөҫ эшләне, аҫау айғырҙай тулаған йөрәген шулай баҫты. Һуңғы арала йәне һис тыныс түгел, күңелһеҙ хәбәрҙәр йөрәген өйкәп тора. Ылау хаҡындағы яңылыҡ та иҫке яраһына тоҙ һипмәне түгел, шулай ҙа ҡоҙалары — табындаштары менән осрашҡас, күңеленән теге юшҡындар ҙа йыуылып төшкәндәй итте. Был тормошта яңғыҙ бәндә, ул ниндәй генә шөһрәтле, ярһыу булмаһын, бер ни ҙә ҡыла алмай. Берҙәмлектә — бәрәкәт, кәңәшеп йәшәүҙә — тереклек.

Табындың ҡыҙған ғына мәлендә ишек тарттылар. Шарап та һемереп, ҡан йүгертеп ебәргәс, донъяның бүтән бөтә хәстәрҙәре лә бер мәлгә онотолғондай иткәйне лә...

— Хажи ағай, коммундар һине таптыра... — Хәйҙәр йомошсоһо икән, шул төштө тараҡан булып ҡоҙалар ашына.

Мөхәммәткәрим "мин юҡ, һин мине күрмәнең" тип әйтергә өлгөрмәне, Хәйҙәр ары теҙҙе:

— Ҡылысбаев менән Ҡотдосов башлыҡтары бураларҙы тентергә, артыҡ ашлыҡты сығарырға ҡушты!

## V

— Аһ, хәсистәр, аһ, хәстрүштәр! — Хажи бағаналай һынын турайта һалды. — Мин ул ыштанһыҙ коммундарҙы буш усым менән аҡылға ултыртайым микән? Шул йоҙроҡтарым менән!.. Мин ул хәстрүштәрҙе шул ҡулдарым менән!.. Муйындарын һындырып, баштарын арттарына ҡаратмаһаммы! — Хажи юл буйы үҙ алдына шулай һөйләнде; волкомсылар, ысынлап та, ихатаһын баҫып алған; бураларҙы аҡтарыуын аҡтармағандар, таш келәттәрҙең ат башындай йоҙағын да емереп өлгөрмәгәндәр.

— Мөхәммәткәрим... Хажи, — тине волком рәйесе Ҡылысбаев.

— Күрше, тиң, Ғибаҙулла энем! Мәгәр "ағай" тип әйтергә телең әйләнмәһә, үҙебеҙсә, әҙәмсә һөйләш!

— Ярай, хажи, һин яңы власты улай эләкләмә! Хәҙер теге замандарҙағыса мин һинең көтөүсең түгел! — Волком көтөүсе булып йөрөгән замандарын да бай иҫенә төшөрҙө. — Кисә саҡырып-саҡырып та ауыл сходына килмәгәс, бөгөн үҙебеҙ төштөк...

— Тәк, тыңлайым, яңы власть! — Хажи үҙен тыныс, ышаныслы тотто.

— Канткомдан волосҡа игенгә яңы разнарядка төшөрҙөләр, шуның буйынса яңы исемлек төҙөнөк...

Продкомиссия рәйесе Ҡотдосов та һүҙгә ҡушылды.

— Һеҙҙең меңгә яҡын десятина һөрөнтө ерегеҙ бар, хажи. Шунан ҡара иҫәп менән генә һалғанда ла, илле-алтмыш мең бот уңыш алаһығыҙ... Шуның ун ике-ун өс мең бото — сәсеүгә, ашарға!.. Ун һигеҙ мең бото — малға! Туғыҙ мең бот тапшырғанһың... Хөкүмәткә! Кәм тигәндә егерме мең ботто дәүләткә тапшырырға тейешһегеҙ.

— Һай, энем-энем — үкһеҙ етем, ҡара хисапҡа, ысынлап та, шәп икәнһең, ауыҙыңды... ҡыйшайта һуғырға; белмәгәйнем.

— Иплэп, хажи! — тип янаны Ҡылысбаев, ә Ҡотдосов, әҙәп һаҡлап, көлөмһөрәне.

— Ас булһаң, хисапҡа шәп булаһың икән ул, хажи.

— Мең десятинанан алтмыш мең бот бойҙай урып алырға... Башыңа тай типкәнме? Әйтәләр ҙә, ашаған белмәй, тураған белә, тип — һин дә шул. — Мөхәммәткәримдең дәү бағаналай кәүҙәһе бәүелгәндәй итеп ҡуйҙы — хәс тә ул шулай аяҡ аҫтындағы ерҙе һелкетте.

— Ярар, хажи, — тип, араға тағы Ҡылысбаев төштө. — Беҙ бында бисәләр һымаҡ, хәбәр һатып, демагогия разводить итергә килмәнек, төш тә ауышты. Беҙҙең ҡулда исемлек бар, унда, хажи, һин дә теркәлгәнһең. Шуның буйынса норманды үтә лә эше лә бөттө!

— Ул ниндәй норма? Үҙегеҙ әйтәһегеҙ — мин нормамды үтәгәм: туғыҙ мең бот ашлыҡты советтарға илтеп тапшырғам! Һеҙ анау жыйын йолҡош батрактан, ярлыларҙан түгел, ә беҙҙән күберәк игелек күрәһегеҙ түгелме? Советтар беҙҙең ишеләргә рәхмәт уҡыһын!

— Хажи, — тине тағы Ҡылысбаев, һәр һүҙен теш араһынан һытып сығарып. — Бөтә донъя революцияһы яҡынлашҡан саҡта өйәҙ генә түгел, күп губерналар ас ултыра, Үҙәктәге ҡалаларҙа халыҡ ҡырыла...

— Ә минең унда ни эшем бар? Мин бер үҙем бөтә Рәсәйҙе туйындыра алмайым, улар боғаҙ йыртып урамда әләм күтәреп йөрөгәндә мин ергә тир ағыҙам, ете ҡат тиремде тунарҙай булам, ә улар, буш хәбәр һөйләп, хәҙер беҙҙе таламаҡсы, башҡортто тамам ергә йөгөндөрмәксе! Рәсәйҙе Рәсәй хөкүмәте ҡайғыртһын, ә һеҙ түгел! Рәсәй хөкүмәтенең ил халҡын туйҙырырға бөтә мөмкинлеге бар, хатта алтынға ҡыҙығып, ошо көндә сит илгә лә ашлыҡ һатып яталар — халыҡ быныһын белмәй... Ә һеҙ... Һин, боронғо ҡылысбайҙар нәҫеле балаһы, Ғибаҙулла, һин, Ҡотдосов энем, нишләп шул кафырҙарға, шул алдаҡ политика алып барған әҙәмдәргә — ят бауырҙарға һатылдығыҙ? Йәнегеҙҙе һатҡанығыҙ, кафырға әүерелгәнегеҙ етмәгән, хәҙер илде, бөтөн малмөлкәтте шуларға һатаһығыҙ, үҙ нәҫел-нәсәбегеҙҙе, үҙ башҡортоғоҙҙо бер ыштанһыҙ ҡалдыраһығыҙ!

— Беҙ ашлыҡтың бер өлөшөн батрак халыҡҡа өләшәбеҙ!

— Эт ялҡауҙар өсөн ниңә улай донъяның аҫтын-өҫкә килтерәһегеҙ?

— Большевиктар тигеҙлек өсөн — аҡса ла, мал да, мөлкәт тә илдә тигеҙ бүленергә тейеш!

— Түбә таҡтаға төкөрөп ятҡан менән һабанда һайрашып бот-бот тир ағыҙған бер буламы?

— Етте, хажи, демагогия!

— Халыҡ та халыҡ, тиһегеҙ, тигеҙлек, имеш — әйт, беҙ халыҡ булмай кем һуң? Һин дә башҡорт, мин дә башҡорт, анау Ҡотдосов энем дә... Беҙ нимә бүлешәбеҙ, ниңә бар тапҡан-таянғанды ҡайҙа-ҡайҙа ятҡан Питерға оҙатабыҙ, юҡ хаҡҡа! Улайһа, батша заманында ла илдән бөтә тауарҙы баҙар хаҡы менән алдылар, беҙгә лә, уларға ла тигеҙ ҡараш булды, берәү ҙә бер кемде лә ҡыйырһытманы; былай буш хаҡҡа, тиктомалдан мал, иген талайһығыҙ! Көпә-көндөҙ ас шул халыҡты сырҡыратып талайһығыҙ! Мин, ярар, үлмәм, ә күрше Хәйретдиндең, Әнүәр ҡарттың алты-ете балаһы бар — улар налогтан азат, ә орлоҡҡа тигән ашлығын һыпырып алаһығыҙ. Шулмы советтарҙың ысын йөҙө, шулмы уларҙың ғәҙел политикаһы?

— Хажи, етте! Был — демагогия, был дошман һүҙе!

— Энем, был — хәҡиҡәт, был — һинең туған халҡыңдың уй-фекере!

— Лутсы, хажи, иртәгәгә ылау әҙерлә — Сүлейә станцияһына — һинең бураңдан 20 мең бот!

— Ҡапсығыңды киңерәк тот, кафырға һатылған иблис!

— Ипләп!

— Кафырҙарҙың ҡыҙыл һүҙенә алданып йөрөгән хәстрүштәр! Илен, башҡортон һатҡан һаҡаллы сабыйҙар! Һеҙҙе тәтәй биреп, ҡыҙыл әләмдәр сөйөп, кафырҙар әүрәтеп йөрөй! Бер аңларһығыҙ!...

Хажиҙың тамағы ҡарлыҡты, комитетсылар ҡар ҡойоно эсенә кереп юғалғайны инде, тик шәүләләре генә һаман күҙ алдынан китмәй торҙо. Бай, өнө тығылып, аҡтыҡ көсөнән яҙып, ишек алдында боҙға тубыҡланды... Ике бисәһе, ике яғынан саҡ-саҡ һөйрәп, өҫкә табан өҫтөрәне.

Көн сүкте, яҡтылыҡ шиңде, хәрәкәт ойоно, ауаздар баҫылды; теге алыҫтағы шаңдауҙар ҙа, ҡайҙалыр китеп, бушлыҡҡа һеңеп ҡуйҙы.

Мөхәммәткәрим хажи, башы етеп, тирә-яҡ ауылдарҙан йыйған ашлығын күптән станцияларға, пристань келәттәренә тапшырып ҡуйғайны. Волком быныһын ғына беләлер, тип уйланы, яңы контрибуция һалыуҙарынан ҡурҡты.

Комитетсылар барыбер ҡуйманы, теге егерме биш мең ботто таптырып тағы килде. Был юлы ревтрибунал башлығы Ғайнанов үҙе йөрөй.

— Зөфәр энем, — тине хажи, һәр һүҙенә баҫым яһап. — Ҡыҙыңды, Сәүиәне әйтәм, кем уҡытып, кеше иткәнен оноттоңмо? Миндә орлоҡтан башҡа ашлыҡ юҡ!

— Красноуфимға, Сүлейәгә оҙатып бөттөңмө? — Ревтрибунал етәксеһенең күҙҙәре зәһәр осҡондар сәсте. — Улайһа, контрибуция түләрһең... Егеттәр, башлағыҙ!

— Хәшәрәт, игелекһеҙ! — Хажиҙың тыны ҡыҫылды.

Ревтрибунал башлығының йөҙө ағарынып китте, хажиҙың эйәге аҫтына наганын терәне.

— Быны быны күрәһеңме?

Хажи өнөн сығарманы, утлы ҡарашын дошманына төбәп тик торҙо.

Ылауҙар артынан ҡапҡа ябылғас, Хәйҙәр бөтә аҫҡыстарҙы алдына һалды. Мөхәммәткәрим иһә бер һүҙ ҙә ҡатмай ҡыҙы бүлмәһенә йүнәлде.

— Күрҙеңме Зөфәр ағайыңды? Ҡайһылай ҡылана? Сәүиәһе өсөн рәхмәте шул булды.

Бибисара өндәшмәне, хажи ғәҙәтенсә ишекле-түрле кәләп һалыуын белде.

— Мин күпме киҫәттем һине, ҡыҙым, күпме өйрәттем! Шул бәғерһеҙ таштар нәҫеленә ҡатышма, шуларҙы үҙеңә иш итмә, тинем. Фәкир, игелекһеҙ зат бит ул. Ыштанһыҙ ҡотлоярҙар! Хәбәр һөйләргә, тамаҡ йыртырға уларҙы ҡуш, ҡулдарынан бер йүнле эш килһә... Күңелдәре ҡаты, холоҡтары еңел бит уларҙың! Аҡыл юҡ, баш баҫып эшләү юҡ! — Хажи баҫылманы. — Әхирәт, әхирәт, тинең, дуҫ, тинең. Хәҙер һиңә шулар күрһәтә!

— Әтей!

— Минең тел ярҙамы менән урынлашты бит Сәүиәһе өйәҙ гимназияһына, минең абруй менән учитель булып сыҡты — һин инәлдең.

— Әтей, Бәхтейәр учитель бай нәҫеленәнме, ҡарттаһы бай булғанмы?

— Нимәгә?.. — Хажи ярһыны. — Мин уға Мөлөктө һөйләйем, ул Сәлихте ҡыҫтыра...

— Бәхтейәр учитель шул Ғайнановтарға барып йөрөй... Бәхтейәр учитель кемдәр яҡлы?

— Шул хәстрүштәргә һатылғандыр... Ә һинең Сәүиә дуҫың кем яҡлы?

— Белмәйем, әтей. — Бибисара тағы һырт йөндәрен ҡабартты.

— Нишләп белмәйһең? Әхирәткәйем, унан айырылмайым, Златоустҡа ла бергә китәбеҙ, тинең. Кем миңә ялбарҙы, кем уны иң яҡын дуҫым тип атаны?

— Әтей!

— Һин, ҡыҙым, ҡуйыныңда йылан аҫрағанһың... Хәҙер, әнә, әтеһе ҡалай тешләшә, ҡыҙы ла совет яҡлылыр, мине лә, иҙеүсе синыф тип, күрә алмайҙыр. — Хажи ыуаланды. — Кемде ҡуйынымда йөрөттөм, кемдәрҙе кеше иттем? Һин ғәйепле!

— Әтей!

— Һин инәлдең, һин аяҡ аҫтына ятып ялбарҙың! — Хажи креслоһына сумып, ыңғырашып ултырҙы. — Ҡыҙым,— тине ул ахырҙа, — мине ғәфү ит; был ҡыҙыл хәстрүштәргә йәнем ҡарая. Шашҡандан-шаша баралар, көн һайын яңы бер нәмә уйлап табалар. Контрибуция, штраф, опись имущества, конфискация... Хәҙер продразверстка! Бөтә белгәндәре — талау, йолҡослау!

— Бөтәһен дә талайҙар, әтей... — Бибисара телгә килде. — Хатта, һәр хужалыҡҡа норма тип, ярлыларҙан да ашлыҡ жыялар...

— Норма, норма! Улар бөтә халыҡты талай, бөтәһен дә бер бағанаға бәйләй, дөрөҫ! Кафырға һатылған йәндәр! Кафырҙар бушҡа тиерлек ашаһын, бот күтәреп түбәгә төкөрөп ятһын да беҙҙең халыҡтан килеп сырҡыратып тартып алһын! Шул тип йөрөйҙәр! Кафыр ҡолдары, уларҙың ҡушҡанын үтәй... Ҡайҙан килеп сыҡты был афәт — илде иблис баҫты! Ҡайҙан илгә шул хәстрүш большевик тигән тоҡом таралды? Мәскәү, Петербургтарында башланды, беҙгә килде... Кафыр шымсылары!

— Әтей, ятып ал! — Бибисара атаһын ныҡ йәлләне, ләкин ярһыуын баҫыр хәлдә түгел ине. Үҙе лә бер сараларын да таба алмауына үртәлде. Үҙенең хәлен уйланы. Бәхтейәр тип ҡайтты ауылға, ә ни тапты? Ҡалалағы мәхшәрҙән ҡотолорға теләне, һөйөклөһөн һағынды... Эт араһынан ҡасып, бүре өйөрөнә юлыҡтымы? Бында ла ялҡын эсенә

ҡапты, хәтәр мәхшәргә тарыны... Элек кенә рәхәт йәшәгән, ауылдаштарын дуҫ-туған итеп күргән, атаһы ҡуйынында ел-ямғыр теймәй көн күргән.

— Ҡыҙым, кил әле! — Хажи ҡыҙын ныҡ ярата, уны бер уҡымышлы зат тип һанлай, теләһә лә, асыуланмай, ярһыһа ла, тиҙ ҡайта. — Ҡыҙым, әйт әле: һинеңсә, мин ни эшләргә тейеш хәҙер? Хәсис большевиктарҙың фармандарына буйһонорғамы, хәләл көсөм менән жыйған мөлкәтте таратырғамы, күнергәме шул яҙмышыма, әллә?..

— Белмәйем, әтей.

— Әллә алышҡа алынырғамы? Бил яҙып...

— Әтей, большевиктарҙың власы ныҡ микән? Гәзиттәр яҙыуынса, улар башҡорттарға ла күп вәғәҙә бирә... Мәскәүҙә татарҙар менән бергә автономиялы республика төҙөү тураһында яҙалар...

— Вәғәҙәләре күп, халыҡты шул буш вәғәҙәләре менән үҙ яҡтарына ауҙарырға, властарын нығытырға маташалар... Татар менән бер республика төҙөп, ике халыҡты бер ҡаҙанға бутап эштәре барып сыҡмаҫ!

— Ҡәтғи һөйләшәләр, үтә ҡырҡыу холоҡлолар үҙҙәре...

— Тотҡан ерҙән һындырып баралар... Ә үҙ-үҙенә ышанған кеше сәбәләнмәй, ҡыҙым. Былар ашығалар, ҡурҡалар!

— Әтей, мин бер нәмә лә белмәйем, бер ниндәй ҙә кәңәш бирә алмайым. Был большевиктар менән бәрелешһәң, бил яҙһаң... үлтерешергә кәрәк тә...

— Тағы, ҡыҙым, шулай ҡуян хәлендә ҡыуаҡ төбөндә боҫоп ятып ҡалыу ҙа мәсхәрә. — Хажи һынын турайтты. — Мин үҙ ғүмеремдә бер ваҡытта ла бер кемгә лә баш эймәнем, ҡыҙым, ә бүтәндәр миңә баш эйҙе, бүтәндәр һүҙемде тыңлап йәшәне. Мин бойорҙом, мин әйләндерҙем Мәғҙәндең тирмән ташын.

— Белмәйем, әтей. Ҡурҡыныс та, тағы асыу ҙа килә...

— Тын алырға мөрхәт бирмәйҙәр, таш диуарға килтереп һырыҡтырҙылар... — Хажи ярһый барҙы. — Ичкер халҡында бер әйтем бар: сысҡанды стенаға ҡыҫһаң, ул арыҫланға әүерелә! Бер көн килер... — Тағы телен тешләне. Хажи ҡыҙына бөтә серен дә (Ҡаранторан кәңәшмәһе мәсьәләһен дә) асып һалырға йөрьәт итмәне.

— Әтей, бынан кире мин Сәүиәләргә бармайыммы? Уның менән һөйләшмәйемме? Бәхтейәр, училищеға эшкә кил, Сәүиәнең ҡыҙҙар класында уҡытырһың, тине.

— Юҡ, бар, Сәүиә менән асыуланышма! — Хажи башын эшләтте, асыуы ла ҡайта төштө, шай. Ниһайәт, хисен айыҡ аҡылы еңде. — Беҙ ҙә алабарман булмайыҡ, большевик хәстрүштәр кеүек, ҡыҙып-туҙып, тотҡан ерҙән һындырып бармайыҡ. Көнө бер килер...

— Нимә?

— Ашыҡмайыҡ, тим, көнө бер тыуыр, беҙҙең урамда ла байрам булыр. Ул бизмән табағы бәүелеп тора бит, ҡайһы яҡтыҡы ҡасан баҫып китеүе лә билдәһеҙ.

Хажи саҡ ҡына баҫылғандай итте.

## VI

Күҙ ҡыҙҙырырлыҡ бай ҙа, төшөп ҡалған берәҙәк тә булманы Зөфәр... Баштан уҡ балаға батты, ал-ял белмәне.

Уттай ураҡ өçтө. Тирә-йүндә халыҡ тирләп-бешеп ашлыҡ ура. Баш ҡалҡытырлыҡ түгел — томра. Ҡояш түбәгә генә ҡунып алған да ҡыҙҙыра. Әйтерһең, ярлы кешеләргә ул да үсле, баштарын нығыраҡ эйергә мәжбүр итә. Ураҡсылар, эçенән әлһерәгән эттәй, телдәрен арҡыры тешләгән. Көнләксөләр ҙә, хужалар ҙа тырыша. Күршеһе Минтаһир старшинаның эше, әлбиттә, гөрләп бара. Уның үҙ хеҙмәтселәре лә, ваҡытлыса ялланған кешеләре лә күп, ә Зөфәр яңғыҙы... Башты күтәрергә мөрхәт бирмәгән ҡояш та бай яҡлы, ахырыһы: яңғыҙаҡты биртендерә, Зөфәр кеүектәрҙең һуңғы хәлен ала. Байға быңдай көн шифа ғына: ашлығын гөрләтеп үçтерҙе, күмәк бала-сағаһы менән йәһәтләп йыйып та алыр. Зөфәргә ел дә ҡаршы, уттай эш мәлендә Фатҡияһы бала таба.

— Ярай, бисәкәй, бала байлыҡ ул, — тигән була уйында икенсене йөрөткән хужа; эсендәгеһен тышҡа сығармаçҡа тырыша, былай ҙа көйәлән Фаткия һылыу һиҙмәй буламы инде: гонаһ ҡылған кешеләй, төçө ҡасып ята. Ире асыуынан берәй ҡаты һүҙ ысҡындырып ҡуймаһын.

— Көймә, хәҙер беҙ уны эш итәбеҙ... — Хәсрәтле хужа өтәләнеп йөрөй аçыраныусы бисәһе тирәһендә. Йәш әсә эсенән ус йомарламылай йән эйәһенә бәхет юрай. Ҡыбырлай алһа ине... Үҙе генә йомошон бөтөрөр, эшен ҡылыр ине лә.

— Аһ, был старшинаның эше гөрләй, мин шул сәскәнде лә жыйып алалмайым! Яҙ тағы үтескә һорап барырға тура килер микән?

Ғайнанов ҡырҡыу, йәш айғыр кеүек аçау. Көн аяҙҙа урып ҡалырға ине лә... Быйыл иртәрәк тотонорға тигәйне! Көнө бигерәк ҡыҙҙыра, ямғырҙарға тартмағайы... Шуға ауырлы ҡатынын да өйҙә ҡалдырманы, исмаһам, аш-һыу өлгөртөрһөң, тине.

Һин әйт әле, нәҡ уттай мәлде һайлаған!.. Фатҡия төçө ҡасып, ҡара буҙрат иренен ҡымтый. Һыҙланһа ла, тынын сығармай. "Ай алла, Хоҙай балаһы!" — Ҡатын арбалағы оло балаһы тураһында ла уйлай. Уныһы сырҡырай ғына, бар ялан шауын күммәксе була, бар донъяны тултырмаҡсы...

Рәхмәт яуғыры, ярай, Аллаһийәрҙең ашнаҡсыһы Бәһиә йүгереп килеп етә һалды, шул ҡабул итте бәпесте.

Ире, тешен ҡыçып булһа ла, атын ҡабат екте, арбаһына яңы ғына бәйләгән көлтәләрен тейәне. Бәһиә апай менән ипләп кенә бисәһен алға яткырҙылар. Йәш атай дилбегәне тотто, бәпес — кендек әбейе Бәһиә ҡулында.

— Ярай, үҙем апҡайтышайым...

— Аллаһийәр һүҙ итмәçме, еңгә?

— Дыуан баҙарына сығып киткәйне — ҡайтып етмәгән...

— Хужабикә һуң?

— Ул өндәшмәй... Йә көсөгөмдө, йә бәкәсемде!

— На, малҡай!

Фатҡияның ыңғырашыуы, бәпестәрҙең сырылдауы тәгәрмәс тауышы аçтында күмелеп ҡала.

Бәпескә Сәйфетдин мулланан Сәүиә тип исем ҡуштырҙылар. Фатҡия үҙе шулай теләне, исеме яңыса булһын, тине.

Ҡыйғас ҡаш, зөмрәт ҡарағусҡыл йөҙ йылмайып өндәшә иренә; тегеһе, ярһыу зат, шул йылмайыуҙы еңә алмай. Ҡайһылай ғына асыулы булһа ла, шул йылмайыуҙан ебеп төшә. Ҡара күҙҙәре осҡон сәсә, ирҙең йөрәген өтөп ала.

Зөфәр үҙе лә балаларым, Фатҡиям, тип үлә яҙып торҙо, донъяһын бөтәйтте, ишле мал баҡты, хатта умарта ла тотоп маташты. Серәшеп тә, байҙар менән дә ярышырға самалап, намыҫланып йәшәне. Бар хыялы етеш көн, байҙарға тиңләшеү ине. Сәмселлеге лә, ғәрсел холҡо ла шуға мәжбүр итте.

Эйе, балаларын яратты, Фатҡияһын өф итеп кенә торҙо. Иң мөһиме барыбер шул ине — Ғайнанов үҙенең иң оло, ҡәҙерле мөлкәте итеп шул балаларын, Фатҡияһын һананы... Кеше ишетһә, бот сабып көлөр, ауыҙын да астырмаҫтар.

Империалистик һуғыштан ҡайтҡас, ревтрибунал рәйесе итеп тәғәйенләнеләр. Ғайнанов башы-тояғы менән шул комитет эшенә сумды.

Дүрт баҫҡыслы Мәғҙән мәктәбен, шунан өйәҙ үҙәгендәге ҡыҙҙар гимназияһын тамамлаған Сәүиәһе лә хәҙер тотошлай уның фекерҙәшенә әйләнде, ауылдың йәмәғәт эшендә алдан башлап йөрөй.

Заманында бик һирәктәр өлөшөнә төшкән гимназияға Зөфәр Ғайнановтың ҡыҙы ҡайҙан барып эләкте һуң? Күп балалы ғаилә кешеһенә был бәхет ҡайҙан тәтене?

Өйҙәгеләр эштең айышына аҙаҡтан ғына төшөндө. Сәүиә Мәғҙәндә Мөхәммәткәрим хажиҙың уртансы ҡыҙы менән бергә уҡыны, Бибисара менән бергә уйнап үҫте, үҫкәс тә, бер-береһенән һис айырылышмаҫтылар... Хажи ҡыҙын ҡалаға уҡырға илтергә йыйына, тегеһе иң яҡын әхирәтен дә үҙенән ҡалдырмай.

Балалар бер-береһенә иптәш тә, күҙ-ҡолаҡ та булыр, тип, хажи уртансы ҡыҙының үтенесен кире ҡаҡманы.

Шулай итеп, Сәүиә лә Златоуст ҡыҙҙар гимназияһын тамамланы — хәҙер, ана, ауылда кеше булып йөрөй, Бәхтейәр учитель менән йәнәш ауыл училищеһында уҡыта.

Хөкүмәткә ул ваҡытта фельдшерҙар ныҕыраҡ хәжәт ине шул (гимназияла фельдшерға ла уҡыттылар — революция булып ҡына, ҡыҙҙар фронтҡа оҙатылмай ҡалды), шуға Мәғҙән һымаҡ төпкөл ауыл балаларына ла өйәҙ уҡыу йортонда белем алыуға юл асылды. Хажи, ярай, бай, бәйләнештәре көслө; ул ҡыҙын нисек тә урынлаштырыр ине... Уның ҡыҙы ярҙамында, шул Бибисара арҡаһында Сәүиә лә әҙәм булып китте.

Мөғәллим булыу хоҡуғын алғас, тура Мәғҙәнгә ҡайтты, ә Бибисара өйәҙ ҡалаһында ҡалды. Ауылға, мал-тыуар араһына һис аяғы тартманы иркә бай ҡыҙының. Ул ауыл тормошон белмәйме? Ауылда ниндәй йәм бар? Хәҙер яңы замандар тыуа... Ата-әсәһе лә гел ҡала тормошона ҡыҙыҡып, ҡалаға атлығып йәшәне. Мәғҙәндә Бибисара иң күп тигәндә ай түҙә, шунан тағы өйәҙ ҡалаһына ашыға... Атаһы ла һә тигәнсе Златоустҡа барып етә, шулай йыш-йыш ҡыҙының хәлен белешеп тора ала. Шунда ҡала ятағында Мөхәммәткәрим хажи менән Сәүиә лә осраша торғайны... Ә хажи ҡыҙының әхирәтенә үҙ балаһына ҡараған кеүек ҡараны бит!

Ҡала тормошона өйрәнеп, өйәҙ үҙәгенә эйәләшеп кенә бөттөм тигәндә был Бибисара нишләп Мәғҙәнгә ҡайтып төшкән? Ниндәй сәбәптәре бар, ниндәй ҡорт саҡҡан был наҙлы бай балаһын?

Сәүиә әхирәте үҙе лә, күршеһе Нәфиғә әхирәте лә был хәлде ҡайһылай ҙа юрарға белмәй ҡаңғырҙы.

Заманында Бәхтейәргә лә ике йыллыҡ өйәҙ уҡытыусылар училищеһында уҡырға яҙҙы.

— Һин дә Златоуст жулигы булып сығаң... — тип көлдө Мәғҙән ҡыҙҙары егеттән.

Бәхтейәр һирәк-һаяҡ мәктәп эше менән өйәҙгә килеп сыға, шунда ауылдаштары янына ла һуғыла. Тегеләргә ата-әсәһе күстәнәс төрөп ебәргән бит.

— Рәхмәт инде, Бәхтейәр ағай, — тип йылмая Бибисара.

— Хәҙер самауыр ҡуям! — Оҙон толомло Сәүиә һикереп тә төшә.

Ҡыҙҙар урындарынан ҡуба, күбәләктәй, ауылдаш ағай тирәһендә өйөрөлә. Ни алырға, ни бирергә белмәйҙәр: ауылдашы уларҙың хәлен белешеп йөрөй, өйҙән тоҡ-тоҡ күстәнәстәр, изге хәбәрҙәр тейәп килгән.

— Һеҙҙе һағынғандар, каникулға көтәләр...

— Әтейем килеп ала, килеп ала! — тип сәбәкәй итә Бибисара. — Сәүиәкәйем, һин һабағыңды осланың, ә минең ҡойроҡтарым бар!

Ҡыҙҙар шат, һөйөнөстәре эстәренә һыймай — бөгөн шул хаҡта һөйләшер көнмө, сибәр ауылдаш ағай килгән.

— Мәғҙәнгә бер ҡайтып урағандай булдыҡ! — тип сәрелдәй Бибисара.

— Һуң, ҡыҙҙар...

— Бәхтейәр ағай, инәйемдәргә әйт: беҙ бында ялҡтыҡ!

— Эйе... — Икеһенең дә ауыҙы һис ябылмай.

— Рәхәт булып китте, тәндәр яҙылып ҡалды, ҡыҙҙар. — Бәхтейәрҙең дә йөҙөнә йылмайыу ҡуна.

— Өйәҙ мәғариф бүлегендә эшең бөтһә, ултыр!.. — тип тәҡдим яһай Бибисара.

— Юҡ, ҡыҙҙар, был юлы ашығам... Икенсе ваҡыт...

Икенсе юлы улар ҡала баҡсаһына барҙы. Бәүелсәктә бәүелде, асыҡ һауала сәй, кисель һемерҙеләр. Бәхтейәр үҙе генә һыра ла тәмләне.

— Бында, Златоуста, ҡайҙа баҡма, тауҙар, урмандар... — тип һоҡланды егет. — Ә ҡала шунда һунарсы йорто һымаҡ ҡына.

— Тимер юл үтә... — тип ҡыҫтырҙы Сәүиә.

— Тимер юл станцияһы булмаһа, бер биҫтә генә көйө ҡалыр ине Златоуст, — тип көлә Бибисара.

— Тимер юл бында Урал һырттарын киҫеп үтә, ҡыҙҙар, — тип аңлатты Бәхтейәр.

— Әйҙә, тағы бәүеләбеҙ! — Был — Бибисара.

— Минең башым әйләнә. — Сәүиә күҙҙәрен керпек аҫтына йәшерә, егет яғына ҡарамаҫҡа тырыша.

— Бәхтейәр ағай, нығыраҡ эт! — Бибисараның дәрте ташып тора. — О-о! — Ул һауаға оса. — Ха-ха-ха!

Урман, тауҙар бергә ҡатыша, ер шары ла хәрәкәткә килә — барса ғаләм әйләнә, өйөрөлә-сөйөрөлә.

— Бәх-те-йәр! — Ҡыҙ кинәнә.

— Би-би-са-ра! — Егет тә көлә.

— Сә-үи-йә, әй-ҙә! — Ҡыҙ әхирәтен дә бәхетле иткеһе килә.

Сәүиә аҫтан тороп дуҫын күҙәтә. Теге күктәрҙең етенсе ҡатына атыла, бәхетле — әллә ҡайҙарға елә, ауыҙы йырыла...

— Ха-ха-ха!

Һөйөнөс, шат ауаздар тирә-яҡҡа яңғырап тора. Был ҡала баҡсаһында бөгөн Мәғҙән балалары уйын ҡора.

Ҡыҙ бышлығып бөткән, йыш-йыш һулай. “Ай!” тигән кеше булып, “Ауам!” тип хәйләләшеп, бәүелсәктән төшкәндә егет ҡосағына аҫылынды, әхирәте күрмәмешкә һалышты.

— О, Бәхтейәр, башым әйләнә! — Ҡыҙ быуынһыҙ. Бәхтейәр уны саҡ ҡына ҡосағында ҡыҫып тота.

— Әйҙә, хәҙер, Сәүиә, һин...

— Юҡ! — Сәүиә баш тарта, Бибисара һаман һулышын тыя алмай.

Бәхтейәрҙе аңламаҫһың: әллә мәғариф бүлегенә йомошо төшөп килә өйәҙ ҡалаһына, әллә бүтән сәбәп таба? Ауылда ҡыҙҙарҙың каникул ваҡытында ла осрашалар бит! Мәғҙәндә Бәхтейәр учителде алмаштырып ҡуялармы ни: тыйнаҡ, сабыр. Бибисараларҙың өйөнә лә килә, байбисәләр ҙә, Мөхәммәткәрим хажи үҙе лә учитель, тип өлтөрәп тора. Өрмәгән ергә ултыртмайҙар! Ҡайһы берҙә Бибисараларҙа Сәүиә лә була — шунда осрашалар йәштәр.

— Был һуғыштың осо-ҡырыйы күренмәй, — тип һөйләй Сәүиә.

— Ә әтейем “беҙгә — барыбер”, ти, уны өйәҙ буйынса пристандәргә, станцияларға ашлыҡ һатыуға яуаплы итеп ҡуйғандар... — Бибисара үҙ һүҙен тылҡый.

— Минеңсә, был һуғыштың фәтүәһе юҡ, халыҡты нығыраҡ фәҡирләндерә, — ти Бәхтейәр учитель, көрһөнөп.

Әллә ниндәй һүҙҙәр һөйләйҙәр был хыялыйҙар, Рәсәй хәлен тикшерәләр, сәйәсәткә төшөп китәләр.

— Халыҡ хөкүмәт политикаһы менән риза түгел, илдә боларыш... Халыҡты төрлө фирҡәләр үҙ яғына тарта. — Бәхтейәр учитель ҡул һелтәй.

— Әйҙә, лутсы һыу төшөргә!

Иҫке ауыҙҙан — яңы һүҙ.

— Әй-й ҡыҙҙар, килешерме? — тип ҡурҡыуға төшә Бибисараның күршеһе Нәфиғә.

— Бәхтейәр ағайҙы алмайбыҙ! — Был — Сәүиәнең хөкөмө.

— Юҡ! — тип ҡырт киҫә ҡыҙҙар.

— Ҡыҙҙар, көн эҫе... — үҙегеҙ генә барығыҙ! — тип ризалаша Бәхтейәр. Ул ыңғай кеше, бер ҡасан да ирекһеҙләшмәй.

— Эй һин, Сәүиә!.. — Бибисара иренен турһайта.

— Сәүиә дөрөҫ әйтә! — Нәфиғә килешә. — Күрһәләр, Сәйфетдин мулла әллә нимә тип һөйләп сығарыр...

— Ҡыҙҙар, иртәгә осрашырбыҙ. — Бәхтейәр хушлаша һала.

## VII

Ҡаранторанда үтәсәк йәшертен кәңәшмәне тәүҙә өйәҙ үҙәгендә саҡырырға уйлағайнылар, аҙаҡ кире ҡайттылар. Златоуст үҙе ҡайҙа ята ла волостары ҡайҙа? Ҡаранторан биҫтәһе — үҙәктә...

Өйәҙ офицерҙар йыйынынан баш тартып, волостарҙан вәкилдәр кәңәшмәһе үткәрергә ҡарар ителде.

Шакир мулла үҙе, өйәҙгә йыш йөрөгәнлектән, Рычагов менән дә, Войцеховский менән дә яҡшы таныш ине. Донъялар боларып киткәнсе лә был кешеләр Әптерәштәге белештәренә йыш һуғылды. Өйәҙ хәрби идаралығында төрлө бурыстар атҡарғас, волостар буйынса йыш йөрөргә тура килә.

Рычагов тәбәнәк кәүҙәле, ҡалын муйынлы кеше, ауыҙынан тәмәкеһен төшөрмәй. Күп һөйләшмәһә лә, большевиктар хаҡында һүҙ сыҡһа, самаһын онота... Шунда башҡорт муллаһы менән урыҫ офицерының араһы тағы яҡыная.

— Василь Васильевич, беҙҙең волоста офицерҙар әҙ, күптәре ярлыябаға араһынан сыҡҡан, шуға уларға бик таянып булмай... Ҡайһы берҙәре большевиктар яҡлы...

— Мәсьәлә хәл ителде, Шакир... — тине офицер, түҙемһеҙләнеп. — Һинең фекерҙе Войцеховский ҙа яҡлай: бер офицерҙарҙы ғына йыйып бутҡа бешмәҫ, бында, күберәген башҡорттар, мишәрҙәр йәшәгән төбәктә, беҙҙе әҙер армия көтөп тормай — бында, төпкөлдә, беҙҙең таяныс — һеҙ! Восстаниены урындарҙа һеҙ үҙегеҙ әҙерләрһегеҙ, үҙегеҙ күтәрерһегеҙ, ә беҙҙең, үҙәктең, бурысы тик волостар араһында бәйләнеш булдырыу! Ҡаранторанға ла күп кеше йыймайбыҙ: һәр волостан берике вәкил. Мәғҙән волосынан һин дә, Мөхәммәткәрим хажи ғына. Иң ышанысլы кешеләр! Унда дөйөм мәсьәләләр генә хәл ителәсәк, үҙ-ара шәхси танышыу ойошторола...

— Сапҡындарҙы беҙ йөҙгә танырға тейешбеҙ! — тине Шакир мулла.

Ҡаранторан — оло юлдар сатында ултырған ҙур урыҫ ауылы. Үҙәге ҡала биҫтәһенә лә оҡшабыраҡ киткән. Бында волостың идара эше йорттары, байҙарҙың ике-өс ҡатлы таш лавкалары теҙелешкән, аяҡ аҫтына йомро йылға ташы түшәлгән.

— Халыҡ күп йәшәгән урынды һайлап уңай иткәндәр — мында, ҡырҡ ата балаһы умарта күселәй мыжғышҡан ерҙә, кәңәшмә үткәреү большевиктарҙың башына ла килмәҫ... — Шакир мулла ҡәнәғәт йылмайҙы.

— Өҫтәүенә, баҙар көнө! — Мөхәммәткәрим хажи ҙа йәнләнде.

Мәғҙән волосы вәкилдәре күтәренке кәйеф менән тәғәйен урынға атланы. Аттарын бөтөнләй икенсе ерҙә туғарғайнылар. Март тыуған. Урамда йәнлелек, байрам кәйефе. Хажи менән мулла ла ҡәнәғәт рәүештә түштәрен һыпырып ҡуйҙы. Йәнәһе, өҫ-башты төҙәткеләп, саҡырылған ергә ыҫпай барып инергә кәрәк.

Был кәңәшмәлә ҡатнашыуҙың үҙҙәренә ҙур мәртәбә икәнен ҙур сауҙагәр йортона ингәс тә төшөндөләр. Оло зал байрамса биҙәлгән, һәр тәңгәлдә байрамса кейенгән дәрәжәле заттар. Хәрби кейемлеләр күренмәй.

Мәғҙәндәрҙе ир официанттар ҡаршыланы. Пароль әйтештеләр.

— Яҙ, гүйә, Ҡаранторанда башлана!

— Ҡаранторан ҡунаҡтарына сәләм!

Кәңәшмә Ҡаранторан ресторанына ҡунаҡтар йыйылыу һылтауы менән үтәсәк. “Шәп!” — тине хажи. Ул бындай йыйындарҙа йыш була, шуға мулланан алдараҡ төштө, ҡыйыу эш итте.

Теге официанттарҙың береһе, ҡайҙан килгәндәрен белешкәс, тәғәйен өҫтәлгә ултыртты. Йыйнаҡ ҡына ҡор. Артистар сығыш яһай торған мөнбәрҙә бер нисә әфәнде ҡунаҡлаған. Мулла, хажи менән Рычагов баш ҡағып иҫәнләште. Бүтән волостарҙан килгән таныштар ҙа бар, тик барыһы менән ҡул ҡыҫышыу мөмкинлеге юҡ.

Ул арала ян-яҡтан ишектәр ҙә ябылды. Фрак кейгән берәү эстрадалағы пианино ҡашына баҫты. Йыйылыусылар араһында “Войцеховский” тип шыбырлашҡан шыпырт тауыштар ишетелде.

— Яҡташтар, мәжлесебеҙҙе асырға рөхсәт итегеҙ! Бында өйәҙебеҙҙең иң олуғ вәкилдәре саҡырылған, өйәҙ комитеты исеменән минең ихлас тәбрикләүемде ҡабул итегеҙ! Ҡул сабыуҙар кәрәкмәй. Һеҙ тамаҡ ялғап алған арала һеҙҙе өйәҙҙәге, илдәге хәл-әхүәлдәр менән таныштырып үтмәксебеҙ.

Сығыш яһаусы, шымып, залға күҙ йүгертте.

— Яҡташтар, һеҙгә мәғлүм, Ватаныбыҙ ауыр осор кисерә, дөрөҫөрәге, ҡаты сирләй. Большевиктар үҙәктә түңкәрелеш яһаны, Рәсәйҙе, уны тәбиғи үҫешенән бормаҡ булып, киң фронтта ҡоротҡослоҡ эше йәйелдерҙе. Шулай ҙа Питер менән Мәскәү генә бөтә Рәсәй түгел әле, ә ул Рәсәйҙең бер утрауы ғына. Ленин, Троцкий етәкселегендәге өйөр шул утрауҙа ҡалды, ә Рәсәй дарьяһында Рәсәй патриоттары Рәсәйҙе һәләкәттән ҡотҡарыу, шул большевистик өйөрҙө яңғыҙ утрауҙа тонсоҡтороу өсөн эш башланы. Утрау тирәләй ҡуласа ҡыҫылғандан-ҡыҫыла. Көньяҡтан — Краснов, көнбайыштан Юдинич килә, ә беҙҙең Уралда генерал Дутов ғәскәрҙәре көс туплай. Яңыраҡ улар һөжүмгә күсте һәм Орскиҙы баҫып алды. Алыҫ Көнсығышта атаман Семенов хәрәкәт итә, бына-бына уға япон армияһы ярҙамға килергә тейеш.

Большевиктарҙың, немес армияһы алдында теҙ сүгеп, Брест килешеүе төҙөүе бөтәгеҙгә лә мәғлүмдер. Тағы бер серҙе асырға ярайҙыр, бында беҙҙең Ватандың иң лайыҡлы ағалары йыйылған: беҙҙең Мәскәүҙәге үҙәк сит илдәр менән тығыҙ бәйләнештә эшләй... Оҙаҡламай инглиз, француз армиялары беҙгә ярҙамға килә, төньяҡта Америка экспедицияһы десант төшөрә... Ниһайәт, большевистик режим ҡамауҙа ҡалды тигән һүҙ! Ватанға, халыҡҡа ҡаршы режим үҙенең һуңғы һулышын кисерә!

— Яҡташтар! — Полковник Войцеховский һыу уртланы. — Беҙ ошо утлы фронттарҙың тылындабыҙ, шуға беҙ, һәр кем үҙ биләмәләрендә, Ватаныбыҙҙы большевистик сирҙән арындыра торорға тейешбеҙ! Һәр волость халҡы үҙ волосын большевизмдан таҙарта!

Тәбәнәк буйлы Рычагов баҫты.

— Әфәнделәр, беҙҙең өйәҙ үҙәк етәксеһе һеҙҙе ил эсендәге хәлдәр менән таныштырҙы. Һәр кемгә мәғлүм ки, беҙ бында һүҙҙе оҙонға һуҙырға йә буш хәбәр сурытырға йыйылмағанбыҙ, шуға артабан йәмәғәткә аныҡ план, тәҡдимдәр генә еткереләсәк.

Беҙҙең өйәҙ үҙәгенең төп бурысы шул: волостар араһында бәйләнеш тәьмин итеү! Шунан урындарҙа восстаниены мөмкин тиклем бер ваҡытта башлау! Әгәр ошоға өлгәшәбеҙ икән, большевиктар отрядтарын туплап өлгөрә алмаҫ, бер волостан икенсеһенә көс ташлау мөмкинлеге юҡҡа сығыр... Урындарҙа әлегә эште үҙегеҙ ойоштораһығыҙ, һеҙ шунда тыуғанһығыҙ, шундағы хәлде беҙгә ҡарағанда ла яҡшыраҡ беләһегеҙ.

Волостар араһында сапҡындар йөрөп торасаҡ, улар бәйләнеште тәьмин итер! Был кәңәшмәлә бер-берегеҙ менән танышығыҙ, һеҙ — беҙҙең иң ышаныслы кешеләр!

Восстание ваҡыты өйәҙҙәге, илдәге сәйәси хәл-ваҡиғаларға ҡарап билдәләнәсәк — ул хаҡта үҙәк урындарға алдан хәбәр ителер.

Өсөнсө булып ерән сәсле ир алға үтте.

— Бөтәгеҙҙе лә ҡорал мәсьәләһе борсойҙор... Беҙҙең үҙәктә ҡорал бар барлығын, тик һәр волосҡа ташып йөрөй алмайбыҙ. Ҡорал — үҙегеҙҙән. Һунар мылтығы, берданка, һәнәк, һуйыл, суҡмар — бөтәһе лә эшкә аша. Иң мөһиме — уяулыҡ, дружинниктарҙың, волревкомдарҙың эшен күҙәтеү, халыҡ араһында уларға ҡаршы өгөт-нәсихәт алып барыу... Ышаныслы кешеләрҙе алдан әҙерләгеҙ!

Тағы мөнбәргә Рычагов ҡалҡынды.

— Әфәнделәр, был кәңәшмәлә бәхәстәргә урын юҡ, шулай ҙа ҡайһы бер аныҡ тәҡдимдәр индерергә мөмкин...

— Беҙ — Мәғҙән волосынан, — тине Мөхәммәткәрим хажи. — Йәмәғәт, минең бер генә тәкдим: урындарҙа тегеләрҙең дружинаһы кеүек үҙебеҙҙең отрядтарҙы төҙөй башларға кәрәктер?

Войцеховский терт итеп ҡалды.

— Хажи, мин һеҙҙе яҡшы беләм, һеҙ өйәҙҙең хөрмәтле инсаны... Шулай ҙа отрядтар менән бик һаҡ эш итегеҙ! Был хаҡта волревкомда белһәләр, бөтә эште юҡҡа сығарыуығыҙ бар... Конспирация, тағы ла бер тапҡыр конспирация!

Уға Рычагов та ҡушылды.

— Халыҡта алаһы ла, ҡолаһы ла бар. Береһе бер, икенсеһе икенсе яҡҡа тарта. Беҙҙең восстание көтмәгәндә башланырға тейеш! Бер, әммә берәгәйле удар! Эште бик-бик йәшертен әҙерләргә тура килә!

Тағы теге ерән һүҙ алды:

— Восстание алдынан волостар араһында сапҡындар йөрөп торасаҡ... Паролде онотмағыҙ!

Тәнәфес иғлан ителде. Полковник менән поручик һәр вәкил менән айырым танышып сығырға тырышты. Мөхәммәткәрим менән Шакир мулла Мәсәғүт, Дыуан, Ҡыйғы, Оло Ҡошсо, Шиҙәле волосы вәкилдәре тирәһендәрәк ҡайнашты. Уларға киләсәктә ошо кешеләр менән бәйләнеш урынлаштырырға тура киләсәк бит.

Тәнәфестән һуң Войцеховский тағы нотоҡ тотто.

— Яңы алынған хәбәрҙәргә ярашлы рәүештә, батшабыҙ Михаил Романов һәм уның ғаиләһе тере, Себерҙә тотола, ләкин атаман Семенов көсәйә — большевиктар ни эшләргә белмәй. Бына-быёна япон десанты төшөргә тейеш. Кронштадта — матростар, Питерҙа, Мәскәүҙә эшселәр баш күтәрҙе, Тамбов губернаһында — крәҫтиәндәр... Шуға Ленин шайкаһы ул ярҙан был ярға һуғыла: илдә тоталь продразверстка иғлан ителде, ул бөтә крәҫтиәндең асыуын ҡабарта, уны эшселәргә ҡаршы ҡуя, казактар ҙа яңы властан ҡәнәғәт түгел... Рәсәйҙә большевизм яҙмышы ҡыл өҫтөндә, шуға, яҡташтар, беҙ бында, тылда, дошманды ут баҫтырырға, уның бөтә пландарын өҙөргә тейешбеҙ! Еңеү өсөн! Большевиктарҙы, ерҙәге шул иблистәр хөкөмөн ҡолатһаҡ, Рәсәйебеҙ тағы иркен һулар, азат булыр. Беҙ ирекле илдең азат граждандары булып йәшәрбеҙ. Еңеү өсөн! Азат Рәсәй өсөн! Рәсәйҙә Учредительное собраниены яңынан тергеҙеү өсөн!

Шунда вальс уйнай башланы, барыһы ла аяғүрә баҫты.

— Рәсәй өсөн!

— Учредительное собрание өсөн!

Бокалдар сыңланы, вальс моңо түгелде лә түгелде. Кемдер “ура” ҡысҡырҙы, вальс тауышын барыбер уҙҙыра алманы; ҡайһыһылыр бейергә төштө, ҡайҙандыр залға сибәр ҡатындар килеп тулды — парлы бейеү башланды. Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар, ниһайәт, үҙҙәрен ысындан да ресторанда ниндәйҙер кенәздең тантанаһында ултырғандай хис итте. Шараптар ҡойолдо, бокалдар сыңланы, көлөшөүҙәр ишетелде, ә вальс көсәйгәндән-көсәйә, аһәңләнгәндән-аһәңләнә барҙы.

*(Аҙағы бар)*